ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 октябрь (карасай) 2023

№39 (1081)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙҙең берҙәмлек... дәүләтебеҙҙең ныҡлы нигеҙе ул



5

Силәбеләге милләттәштәр... иғтибарҙан ситтә түгел



6

Лилиә Ғүмәрованың тормош баҫҡыстары, йәки Хеҙмәттә яуланған үрҙәр



8-10

Бәләкәйҙән ҙур була



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡал!* Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! *2 октябрҙән 12-нә тиклемге* ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында 2024 йылдың тәүге яртыһы өсөн ПР905 индекслы *"Киске Өфө"*гә ташламалы хаҡ менән *750 һум 84 тингә* яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ, *"Киске Өфө"*гә дәррәү генә яҙылып, уҡыуҙан туҡтамаған, фекерле, аңлы, ғәмле, вайымлы милләттәштәр иҫәбен ишәйтәйек!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һеҙҙән, ситтә йәшәгән, эшләгән милләттәштәрҙән, Башҡортостан тураһында һораһалар, һеҙ уны ниндәй һүҙҙәр менән күтәрмәләйһегеҙ, баһалайһығыҙ?

***Мәхмүт СӘЛИМОВ, яҙыусы, подполковник, хәрби хәрәкәттәр ветераны, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, Дондағы Ростов ҡалаһы:*** Башҡортостан тураһында һораһалар, иң тәүҙә, уның гүзәл тәбиғәте тураһында һөйләйем. Урал тауҙары ниндәй икәнен күҙ алдарына килтерһендәр өсөн "Тени исчезают в полдень", "Вечный зов" кеүек беҙҙең тауҙарҙа төшөрөлгән совет киноларын телгә алам. Башҡорт ҡурайы, башҡорт балы хаҡында күптәр үҙҙәре лә белә. Яҙыусы булараҡ та мин тик башҡорттар һәм Башҡортостан, уның үткәне һәм киләсәге тураһында ғына яҙам. Ғөмүмән, минән тыуған яғым тураһында һораһалар, минең һөйләр һүҙҙәрем бик күп.

Үҙемдең бала сағым үткән Дәүләкән районы Яңы Яппар, Шишмә районы Ябалаҡлы ауылдары хаҡында телгә алам. 1910 йылда ошо ике ауылда бер йәйҙә ҡымыҙ менән 900-әр кеше дауаланған, улар һәр береһе айына 28 һум түләгән. Сағыштырыу өсөн: ул ваҡытта бер һыйыр 6 һум торған. Башҡорт ауылдары ныҡ бай булған, дауаланыусылар өсөн 4 ашхана эшләгән. Ә кемдәр ҡымыҙ менән дауаланған һуң? Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында йәшәүселәр - 68 чиновник, 41 уҡытыусы, 18 вуз уҡытыусыһы һ.б. килгән дауа эҙләп башҡорт еренә. Мин революцияға тиклем төшөрөлгән фотоларҙы күрһәтәм - нигеҙе юғары итеп һалынған икешәр ҡатлы йорттар, ҡалай, таҡта ҡыйыҡтар: башҡорт ауылдары ярлы булмаған.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы тураһында ла һөйләйем. Сөнки әле мин йәшәгән Ростов өлкәһен дә азат иткән ул. Дон казактары менән уртаҡ хәрби үткәнебеҙ беҙҙе бөгөнгө көндә лә берләштерә, беҙ автопробегтар, төрлө саралар ойоштораБыҙ. Яугирҙарыбыҙҙың тоғро дуҫы, яуҙашы аттар тураһында ла яҙам мин. 1867 йылда башҡорт аты тәүләп Париж күргәҙмәһендә күрһәтелә. Был да фәнни сығанаҡтарға нигеҙләнгән. 1946 йылда 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән 12 атты Буденный бойороғо менән республикаға ҡайтаралар. Дәүләкәнгә алып киләләр уларҙы, минең ҡартатайым аттарҙы ҡарай. Бер Керчты ғына беләләр, ә ундай аттар күберәк була, тимәксемен. Һәр береһенең орден-миҙалдары була, уларҙы ҡарау өсөн хәрби комиссариат аҡса бүлә. Шуларҙың араһынан Күгат тигәне Дәүләкәндән Әбйәлил районы Рәхмәт ауылына ҡасып ҡайтып китә бит! Ел ҡапҡаны түше менән этеп, сабып барып инә. Һуғышта һәләк булған Фәррәхов тигән яугирҙың ҡатыны менән ҡыҙы сыҡһа, ат тора. Колхоз рәйесе бик абруйлы кеше була, атты ауылда ҡалдыра. Был яугир аттарҙы эшкә ҡушмайҙар, аҙаҡтан, йәйләп үлә башлағастар, һәр береһенә махсус еҙ табличкаға исемен, дәрәжәләрен яҙып күмәләр.

Ростов өлкәһенең Солонецкий хуторы мәктәбе Шаймаратов исемен йөрөтә, унда уҡыған балаларҙы быйыл йәй Башҡортостанға алып килдем. Улар минең тыуған ауылыма яҡын урынлашҡан Халыҡ-ара аэрокосмик мәктәптә ял итте, унда билдәле космонавтар дәрестәр үткәрҙе. Уҡыусылар Башҡортостанға, уның тәбиғәтенә, кешеләренә ғашиҡ булып ҡайтып киттеләр.

Бына 18 октябрь Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт ансамбле килә, улар иһә республиканы бейеү аша танытасаҡ. Өсөнсө тапҡыр киләләр, зал гел тулы була.



✓ *Хеҙмәткәрҙәр һөйләүенсә, һунарсылар ҡурсаулыҡ территорияһынан ситтә йөрөүсе боландарҙы ҡамауға алып, ауларға итһә, улар бар көсөнә сабып-йүгереп, ҡурсаулыҡ территорияһына ҡасып инә һалалар икән.*



*ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА*

# ЛАЙЫҠЛЫ КЕШЕ БУЛАЙЫҠ!



**Заманалар ниндәй генә булмаһын, уны үҙендең насар ҡылыҡтарыңдың, насар һүҙҙәреңдең, башҡаларға ҡарата насар мөнәсәбәттәреңдең сәбәпсеһе итеп күрһәтеүгә ҡаршымын. Беҙ үҙебеҙ йәшәйәсәк ваҡытты, унда булған ваҡиғаларҙы һайлап ала алмайбыҙ, шуға ла һәр саҡ кешелекле һәм кеселекле булып ҡалайыҡсы!**

Халҡыбыҙҙың бөйөк эпосы "Урал батыр"ҙа ла әйтелә был турала, шағирҙарыбыҙ ҙа ижадында был темаға ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт итә - Кеше булайыҡ. Үкенескә күрә, бөгөнгө йәмғиәттә кешенең күңелен аяу тигән нәмә юҡ, аңһыҙлыҡ арҡаһында яһиллыҡ күп. Аҡмулла ла: "Яһиллыҡтан килә ятыр күп афәттәр", - тип әйткән. Һүҙҙең көсөн аңлап, уйламай әйтелгән һүҙҙәрҙең нимәгә килтереүен уйлап эш итеү юҡ дәрәжәһендә. Ошо рәүешле халҡыбыҙҙың һүҙ ҡөҙрәтен тойомлау һәләтен дә юғалтабыҙ төҫлө.

Уҡытыусы һөнәрен һайлап, ғүмеремдә туған телде өйрәнеүгә, аҙаҡтан инде йәш быуынға өйрәтеүгә бағышлауым менән бик бәхетлемен. Ошо хаяһыҙлыҡ хөкөм һөргән йәмғиәттә барған хәл-ваҡиғаларҙан аралап, ҡурсалап торған матур мөхиттә эшләйем. Әле былна яңы ғына Уҡытыусылар көнөн билдәләнек, йыл илебеҙҙә Педагог һәм остаз йылы тип иғлан ителде. Ғаиләлә балаларына ҙур хөрмәт менән башлап яҙылған Уҡытыусы тигән һүҙҙе һеңдерә алған алдынғы ҡарашлы атайым, боронғо һәлмәк йырҙары менән тәрбиәләгән әсәйем дә остаз минең өсөн. Һайлаған һөнәре менән кемеһе кешенең сәләмәтлеген, кемеһе күңелен имләгән ағай-апайҙарымдың һәр һүҙе, һәр ҡарашы мине үҫтерә һәм тәрбиәләй. Тәүге эш урыным, БДУ-ның Нефтекама филиалындағы етәксем Октябрь Кәли улы Вәлитовтың, әле хеҙмәт иткән Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла ректорыбыҙ Салауат Тәлғәт улы Сәғитовтың, ғүмерем буйы маяҡ итеп ҡабул иткән остазым Мохтар Хәснәлхаҡ улы Әхтәмовтың ни тиклем кешелекле, кеселекле булыуы, ҡул аҫтында эшләүселәр менән матур мөғәмәләһен тоя алдым. Үҙем менән бергә эшләгән һәр коллегам - минең өсөн өлгө.

Кеше башҡаларҙан алған күңел йылыһын үҙендә туплаларға ғына түгел, башҡалар менән бүлешә белергә лә тейеш, үҙем дә һәр студентым өсөн иң тәүҙә кеше булып ҡалырға тырышам. Тормош - ул көҙгө, үҙең яҡшы булһаң, унда тик яҡшылыҡ сағыла, холҡһоҙ булһаң иһә, насарлыҡ ауаз булып ҡайта, тип өйрәтәм уларҙы, тормошто, кешеләрҙе, халҡыбыҙҙы яратырға өйрәнһендәр ине, тип теләйем. Үҙенә ҡарата әйтелгән насар һүҙҙе ишетмәскә тырышырға була, әммә милләткә ташланған хаҡһыҙ ғәйептәргә йөҙ һүҙ менән түгел, бер һүҙ менән генә яуап бирерҙәй дәрәжәгә етерлек белемле булһындар. Эйе, тормош - үҙе уҡытыусы, әммә был юлдан үтер өсөн дә умыртҡаң ныҡ булыуы, аҡты ҡаранан айыра белеүең кәрәк. Шуға ла заманға һыҡтанмайыҡ әле, ошо замандың лайыҡлы кешеһе булыу өсөн тырышайыҡ һәм йәштәрҙе лә үҙебеҙҙең арттан эйәртәйек.

**Раушания СОЛТАҠАЕВА,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты Башҡорт филологияһы факультеты доценты, филология фәндәре кандидаты.**

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**"Киске Өфө" гәзите яңы сыға башлаған ғына осорҙа редакция коллективы менән Бөрйән районында урынлашҡан Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында булғайныҡ. Унда эшләүсе хеҙмәткәрҙәр үҙҙәренең ҡыҙыҡлы бер күҙәтеүе хаҡында бәйән иткәйне. Был хаҡта беҙ гәзиттә бер тапҡыр яҙып сыҡҡайныҡ инде, был юлы ул хәл тураһында икенсе маҡсатта ҡабатлап һүҙ алып барам.**

# ИНҺӘҢ - ИЛ,

## сыҡһаң - яу...



Хеҙмәткәрҙәр һөйләүенсә, һунарсылар ҡурсаулыҡ территорияһынан ситтә йөрөүсе боландарҙы ҡамауға алып, ауларға итһә, улар бар көсөнә сабып-йүгереп, ҡурсаулыҡ территорияһына ҡасып инә һалалар икән. Әлбиттә, ҡурсаулыҡтың сик һыҙығында бер ниндәй ҙә билдә йә кәртә юҡ, ҡурсаулыҡ менән уның яныңдағы территория бер яғы менән дә айырылмай: ике яҡта ла бер үк төрлө ағастар, үләндәр үҫкән урман, йылғалар, үҙәндәр, тауҙар, ҡаялар. Әммә йылдар буйына ошолай ҡурсаулыҡ эсенә һыйыныу юлы менән "ике аяҡлы эт-ҡоштан" ҡотолоп ҡалыусы малҡайҙарҙың ҡанына ошо хәл инстинкт рәүешендә һеңешеп бөткән икән. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡлы: ҡурсаулыҡ территорияһына аяҡ баҫҡандан һуң боландар ҡапыл эркелешеп сабыуынан туҡтап, кире боролоп килеп, үҙҙәрен баҫтырып килеүсе һунарсыларҙы үсекләгәндәй: "Йә, шәп булғасығыҙ атығыҙ беҙгә, ә-ә-ә, хоҡуғығыҙ юҡ шул һеҙҙең беҙгә атырға",- тигән һымаҡыраҡ тегеләргә текәлеп, баштарын һелкәләр икән. Ғәжәп, малдың малы яҡланғанлығын аңлай һәм үҙенең ошо хоҡуҡи хәлен ҡыланып күрһәтә белә. Ҡурсаулыҡ эсендә урынлашҡан ауылдарҙа йәшәүселәр ҙә айыуҙарҙың көтөүҙән ҡайтып килеүсе үгеҙ-һыйырҙарға эйәреп килеп, ауыл ситенә еткәс, тороп ҡалыуҙары хаҡында мәҙәк итеп һөйләй. Улар һөйләүенсә, хатта көтөүҙәге малдар ҙа был хәлгә өйрәнеп бөткән, йәғни бер төрлө йән эйәләренең һаҡланыу инстинкты икенселәренә лә йоғонто яһай. Бына һинә мәрәкә!

Былар барыһы ла кешеләрҙең тәбиғәтте һәм ундағы тереклекте һаҡлау маҡсатында уйлап сығар-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Һеҙҙән, ситтә йәшәгән, эшләгән милләттәштәрҙән, Башҡортостан тураһында һораһалар, һеҙ уны ниндәй һүҙҙәр менән күтәрмәләйһегеҙ, баһалайһығыҙ?***

***Гөлимә ЖАНГАБИЛОВА, Ырымбур өлкәһе Диниә назаратының "Каруанһарай" мосолман дини берләшмәһе" етәксеһе:*** Башҡортостан беҙҙең өсөн иң ҡәҙерлеһе. Шөкөр, үҙ дәүләтебеҙ бар, халҡыбыҙ яҡшы йәшәй, үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ. Беҙ, ырымбурҙар, тарихи йәһәттән үҙ еребеҙҙә йәшәһәк тә, рухи терәк эҙләп, барыбер ҙә Башҡортостанға бағабыҙ. Тыуған районым Ишембай, ундағы сәнғәт һөйөүсе ауылдаштарым - киниәбулаттар минә көс бирә.

Ырымбурҙа башҡорттар күп, Башҡортостан Республикаһы тураһында һөйләп торорға ла кәрәкмәй, беҙҙе барыһы ла белә, таный. Минең бар ғүмерем, эшмәкәрлегем Каруанһарай менән бәйле. Каруанһарай - ул башҡорттоҡо, уны башҡорттар үҙ аҡсаларына һалғанды ла беләләр. Уны төҙөүҙә 7128 кеше ҡатнашҡан, төҙөлөш 9 йыл буйына барған. Ат менән эшкә килгәндәргә 25 тин түләгәндәр, атһыҙҙарына - 20 тин. "Беҙ үҙебеҙгә йорт һалабыҙ", - тип, башҡорттар бушҡа эшләгән. Документтар буйынса ла уның атамаһы "Башкирский Караван-сарай", башҡорт йорттоноң эсендә мәсете лә, биналары ла, һарайҙары ла бар. Ат һарайҙарында ул замандарҙан ҡалған бауҙарына тиклем элеңеп тора, бында бар нәмәлә лә шул замандың ипкене һаҡлана. Бик матур урында, ҙур территорияны алып торған комплекс ул. Уның тирәләй ултыртылған баҡсаны башҡорт ерҙәренән алып килеп үҫтерелгән ҡарағайҙар, имәндәр, шыршылар биҙәй.

Бында йыл әйләнәһенә кеше өҙөлмәй. Башҡорттарҙан тыш, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан да киләләр. Бигерәк тә мәҙәни баш ҡала тигән даны булған Санкт-Петербургта йәшәүсе халыҡ күп килә. Мәскәүҙән дә барҙар. Каруанһарай төҙөлөшөнә туранан-тура бәйләнешле булған губернатор Перовскийҙың туғаны ла килде, улар ҙа тарих менән ҡыҙыҡһына. Әлбиттә, был урында уҡыу йорттарының бүлексәләрен асҡанда, теләүселәрҙе үҙ кәсептәребеҙгә өйрәткәндә яҡшы булыр ине, тик быныһы инде беҙҙән генә тормай, быныҡ үҙенең нескәлектәре бар.

Өлкәлә балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙе яйға һалырға ине, тигән хыялыбыҙ бар. Ҡасандыр 11 мәктәптә башҡорт теле факультатив булараҡ өйрәнелә ине, әле улар юҡ тиерлек. Башҡорт теле иң бай тел, Ер шарының яртыһында уның аша аралашып-аңлашып йөрөп була. Хатта миллиардлап кеше йәшәгән Ҡытайҙа ла уйғыр, үзбәк, ҡырғыҙ һ.б. күп, шуға ла унда ла башҡорт теле беҙгә ҙур ярҙамсы буласаҡ. Шуға ла башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә ныҡлап уҡытылһын ине беҙҙән туған телебеҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала вируслы сирҙәр һәм киҙеү көсәйә. Ошо сәбәпле өйгә табип саҡырыуҙар арткан, үткән аҙнала 20 мең саҡырыу теркәлгән, был турала һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин белдерә. Ведомствоның контакт-үҙәгенә 90 мең шылтыратыу булған, уларҙың күпселеге миҙгел сирҙәре. Шулай ҙа коронавирус инфекцияһын йоҡтороусылар ҙа кәмемәй. Башҡортостандың 4 инфекция госпиталендә буш урындар 11-15 процент. Әгәр ҙә ауырыусылар күбәйһә, койка-урындар һаны ла арттырыласаҡ.

✓БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, пандемия башланғандан алып - 372 134, һуңғы тәүлектә 78 кеше коронавирус менән ауырыған. Стационарҙарҙа 103 кеше дауалана, уларҙың 67-һе 60 йәштән өлкәндәр. 858 кеше амбулатор дауалана, уларҙың 75-е өлкәндәр. Вирус 6106 кешенең ғүмерен өҙгән, аҙаҡҡы осорҙарҙа үлем осраҡтары теркәлмәгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указдары менән Башҡортостан хөкүмәтенең өс ағзаһы: вице-премьер Илшат Тажетдинов, мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин һәм Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары итеп һайланыуға бәйле вазифаларынан бушатылды, улар республика парламентында етәксе вазифаларға тәғәйенләнде.

✓Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин бюджет хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. 1 октябрҙән федераль ҡазна, бюджет һәм автономиялы учреждениелар, шулай уҡ дәүләт органдары, хәрби частар, законда хәрби һәм уға тиңләштерелгән хеҙмәт ҡаралған башҡарма власть органдары учреждениелары һәм подразделениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 5,5 процентҡа арттырыла, тиелә унда.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин көҙгө саҡырылыш тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Ул 1 октябрҙән 31 декабргә тиклем дауам итә. Быйыл 18-27 йәштәге 130 мең егет хәрби хеҙмәткә саҡырыласаҡ. "Улар хәрби хеҙмәтен Рәсәй территорияларында үтәйәсәк. Яңы төбәктәргә ебәрелмәйәсәктәр, шулай уҡ МХО бурыстарын үтәүҙә ҡатнашмаясаҡтар", - тип аныҡланған илдең Минооборона сайтындағы документта.

✓ Табип белеме булған А.П. Чехов һәр кемгә көнөнә иң кәмендә 10 саҡрым араны йәйәү үтергә тәҡдим иткән, тиҙәр. Йәйәүләп йөрөүҙе хупларға һәм быға күберәк кешеләрҙе йәлеп итергә кәрәк.



БАШҠОРТОСТАНЫМ!

# ҺӘР КЕМ ЙӨРӘГЕНДӘ УЛ!



**Һәр кем үҙенең тыуып-үҫкән ерен ярата. Быны инҡар итеүселәр ҙә, тыуған ерҙәренән ситтә йәшәүҙе хуп күргәндәр ҙә күңелдәрендә үҙҙәре тәү тапҡыр тәпәй баҫҡан ерҙәрен һағынмай ҡалмай.**

Шулай, апайым совет осоро заманында алыҫ Үзбәкстан яҡтарына барып сығып, шунда тормош ҡороп, йәшәргә ҡалды. Йыл һайын Әбйәлилгә ҡайтҡанында тыуған яҡтарын һағынып илауы тураһында һөйләр ине. Ташкентта балаһы үҫеп буй еткерһә лә, апайым берегеп йәшәп китә алманы, хаҡлы ялға сыҡҡас та Башҡортостанға әйләнеп ҡайтты. Һәм иң хикмәте шунда - уның улы әсәһе менән республикаға ҡайтты ҡайтыуға, ләкин күңеле үҙе тыуып үҫкән тыуған ерендә - Үзбәкстанда ине.

Ошолай үтәләр ҙә инде тыуған яғынан йыраҡта йәшәргә мәжбүр булған кешенең ғүмере. Мин үҙем иһә Әбйәлилемдән ситтә йәшәүемде күҙ алдына ла килтерә алмайым. Күрше Магнитогорск ҡалаһындағы студент йылдарым үтте, уҡыған мәлдә лә аҙна һайын ауылға атлығып торҙом. Городҡа (Әбйәлилдәр Магнитогорск ҡалаһын шулай йөрөтә) йыш юл төшә хәҙер ҙә, ләкин бөләкәйҙән күрепбелеп үҫһәм дә, урыҫтарын да туғандар кеүек күрһәк тә, күңелгә үтеп инә алмай. Шуға күрә йомош менән барһаң да, туғандар саҡырып торһа ла, тиҙ генә ҡайтыу яғын ҡарайым. Магнитогорск ҡалаһын сығып, бер аҙ барғас, элек һәр юлсыны "Башҡортостан Республикаһы" исемле стела ҡаршы ала ине, ләкин уны алып ташлағандары бер нисә йыл үтте, ә урынына яңыһын ҡуйырға ҡабаланмауҙары үкенесле. Ике төбәк араһындағы сик юйылмаһын ине.

Башҡортостан - йөҙҙән ашыу милләт үҙ-ара татыу йәшәгән республика. Минең олатайым һәм өләсәйемдең Магнитогорскиҙан килеп йөрөгән урыҫ "вызнакумдары" булды, атайым менән әсәйем университетта бергә белем алған белорус милләте ғаилә менән тығыҙ аралашып йәшәй, минең ғаиләмдең яҡын дуҫтары араһында ла әллә күпме төрлө милләт вәкилдәре бар. Беҙ татыу, бер-беребеҙҙең йола-ғәҙәттәрен, тел һәм диндәрен ихтирам итеп йәшәйбеҙ. Башҡорт булмаған милләттәрҙе ситләштереү тигән күренеш юҡ беҙҙә, әле булһын башҡа төбәктәрҙән күсеп килеп, республиканы төйәк итеүселәр бихисап. Ләкин уларҙың ерле халыҡты һәм бер-береһен хөрмәт итеүе мотлаҡ, тип уйлайым.

Республикабыҙ минә тағы ла шуныһы менән күңелемә яҡын - беҙҙә төрлө саралар күп уҙа. Бөләкәй генә ауылда ла, район-ҡала кимәлендә лә, шулай уҡ бөтә республиканы үҙ эсенә алған һәм халыҡ-ара саралар Башҡортостандың бер күрке булып тора, тип уйлайым. Быйыл йәй генә булып уҙған "Китап байрамы", балаларҙың ғына түгел ололарҙың да күңеленә хуш килгән "Әйҙә уйнайыҡ" фестивале, "Патриот" хәрби-патриотик паркында даими рәүештә уҙғарылған саралар, Таһир Кусимов исемендәге "Акбуҙат" ипподромындағы ат сабышы ярыштары - быларҙың барыһы ла республикабыҙ халҡында ғорурлыҡ тыуҙырырға булышлыҡ иткән мәлдәр. Берҙәмлеккә әйҙәүсе, илһөйәрлек рухы тәрбиәләүсе, үҫеп килгән быуынға иғтибарҙы арттырыусы, йәштәр һәм оло йәштәгеләрҙең ихтыяждарын күҙ уңында тотоп уҙғарылған мөһим саралар үтеүе менән мәртәбәлебеҙ. Артабан да Башҡортостаныбыҙ рухлы, аңлы юлдан барасағына ышанам.

**Риф САДЫҠОВ.**
**Әбйәлил районы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН...




**11-15 октябрҙә Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы "УМАЙ" этномәҙәни мираҫты һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ойошма менән берлектә башҡорт теленән олимпиада үткәрә.**

Олимпиадала башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар ҙа, иркен аралашыусылар ҙа, башҡорт теле диалекттары менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа ҡатнаша ала. Быныӊ өсөн олимпиаданың сайтына basholimpiada.ru инеп теркәлергә һәм 45 минут эсендә 30 һорауға яуап бирергә кәрәк. Тесты үткәс, йыйылған балдар менән сертификат биреләсәк. Олимпиада тамамланғас, ошо уҡ сайтта дөрөҫ яуаптарҙы ҡарарға мөмкин буласаҡ. Проект Башҡортостан Республикаһының Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды ярҙамында тормошҡа ашырыла.

## ЯҢЫ МАҠСАТТАР

**Булдырылған базаға, һуңғы йылдарҙа өлгәшелгән мөһим ҡаҙаныштарға таянып, беҙ Башҡортостан 3.0 төҙөлөшөнә күсәбеҙ. Был хаҡта етенсе саҡырылыш Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының беренсе пленар ултырышында республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе.**

"Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, беҙҙең идара итеү командаһы бөгөн 2030 йылға тиклемге осорға республиканың үҫеш йүнәлештәрен планлаштыра. Етенсе саҡырылыш "биш йыллығы" 2028 йылда тамамлана, тимәк, беҙгә Башҡортостан киләсәген күҙ алдына килтерергә, ә һуңынан ышаныслы рәүештә маҡсатҡа табан барырға кәрәк. Дәүләт Йыйылышына эш төркөмө булдырырға тәҡдим итәм. Стратегик пландар өҫтөндә эшләгәндә тәҡдимдәрегеҙҙе мотлаҡ иҫәпкә алырбыҙ. Һеҙҙең тәжрибәгеҙ, белемегеҙ биләмәләрҙең, республиканың киләсәген планлаштырғанда бик мөһим", - тине Радий Хәбиров Дәүләт Йыйылышы депутаттарына мөрәжәғәт итеп.

## ҺАЙЛАНДЫЛАР...

**Етенсе саҡырылыш Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 5 октябрҙә үткән беренсе пленар ултырышында парламент спикеры итеп йәнә Константин Толкачев һайланды.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ул тәүге тапҡыр республиканың закондар сығарыу органы етәксеһе булып 1999 йылда тәғәйенләнде, был вазифаны ул алтынсы тапҡыр рәттән биләй. Ултырышта шулай уҡ республика парламенты рәйесе урынбаҫарҙары һайланды. Һөнәри нигеҙҙә был бурыстарҙы "Берҙәм Рәсәй" фракцияһынан Илшат Тажетдинов, Тамара Танһыҡҡужина һәм Салауат Хөсәйенов башҡара. КПРФ-тан Вадим Старов парламент вице-спикеры вазифаһын төп эшенән айырылмай алып бара. Благовещен районы хакимиәтенең элекке башлығы Олег Голов Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙан яңы сенатор итеп билдәләнде.

## УЛАР КҮПМЕ?

**Башстаттың 2022-2023 уҡыу йылы мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостандың мәғариф өлкәһендә 115 мең хеҙмәткәр эшләй (республика предприятиеларында һәм ойошмаларында эшләүселәрҙең дөйөм һанынан 12 процент).**

Уларҙың 32,6 меңе - мәктәп, 4,4 меңе - урта махсус уҡыу йорттары, 4,6 меңе - юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары. Педагогтарҙың 91 проценты юғары белемгә эйә. Мәктәп уҡытыусыларының күпселек өлөшөн (89 процент) ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә, урта һөнәри белем биреү ойошмалары уҡытыусылары араһында ҡатын-ҡыҙҙар - 79 процент, юғары уҡыу йорттарының профессор-уҡытыусылары араһында иһә 60 процент. Дөйөм белем биреү ойошмаларында кадрҙар даимилығы күҙәтелә: һәр икенсе педагогтың 20 йылдан ашыу эш тәжрибәһе бар.

## ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨ...

**Бөгөн, 7 октябрҙә, Өфөнөң "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял итеү паркында Бөтөн Рәсәй йәйәү йөрөү көнөнә арналған байрам уҙғарыла.**

Табип белеме булған А.П. Чехов һәр кемгә көнөнә иң кәмендә 10 саҡрым араны йәйәү үтергә тәҡдим иткән, тиҙәр. Атлап, йәйәүләп йөрөүҙе, физик әүҙемлектең иң ябай формаһы буларaҡ, хупларға һәм быға күберәк кешеләрҙе йәлеп итергә кәрәк. Тап шуның өсөн донъяның 150 илендә Йәйәү йөрөү көнө уҙғарыла, Рәсәй ҙә 2015 йылда ошо проектҡа ҡушылды. Өфөләге байрамда ҡатнашыусылар 2023 метр араны атлап уҙасаҡ. Спорт байрамы программаһы бик ҡыҙыҡлы: фитнес-инструктор һәм олимпиада чемпиондары менән зарядка, "Первушино" пилотаж төркөмөнөң авиашоуы, волейбол, баскетбол, байдаркаларҙа һәм каноэла йөҙөү, велосипед спорты, роллер-спорт, мас-рестлинг, армрестлинг, бысаҡ ырғытыу, батутта һикереү, чир спорты, ГТО комплексы буйынса спортсыларҙың күрһәтмә сығыштары планлаштырылған. Сарала Рәсәйҙең Олимпия комитеты президенты Станислав Поздняковтың ҡатнашыуы көтөлә.

## ҠАҒИҘӘНЕ БОҘМА!

**Башҡортостанда йыл башынан юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн 8 меңдән ашыу йәйәүлегә штраф һалынған.**

Был турала Башҡортостан Республикаһының юл хәрәкәте буйынса баш дәүләт инспекторы Владимир Севастьянов белдерҙе. "Быңдай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы теркәүҙең ҡыйынлығы ла бар. Йәйәүлеләр һәр ваҡыт үҙҙәре менән документ йөрөтмәй, ә шәхесте асыҡларға кәрәк. Был тәңгәлдә штраф биреүгә ҡарағанда иҫкәртеү эше алып барыу яҡшыраҡ", - ти ул. Уның белдереүенсә, йәйәүлеләрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуы йышыраҡ ярамаған урында юл аша сығыу, эскән килеш автомобилгә ҡаршы юлда барыу сәбәпсе булып тора.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәтендә Республика көнөн билдәләүгә әҙерлек буйынса кәңәшмә үтте. Байрам саралары 11 октябрҙә ойоштоорола. Мөһим ваҡиғаға ҡала хеҙмәттәре лә ныҡлы әҙерләнә. Ҡала урамдарын тәртипкә килтереүгә йәмғеһе 2100-ҙән ашыу эшсе, 300 берәмек коммуналь техника йәлеп ителә. Бынан тыш, хоҡуҡ һаҡлау органдары, Өфө буйынса күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм иҫкәртеү эше бүлеге хеҙмәткәрҙәренең, янғын һағы хеҙмәткәрҙәренең һәм ҡотҡарыусыларҙың дежурлығы ойошторола.

✓Өфөлә Берҙәм диспетчер үҙәге телефоны тәүлек әйләнәһенә эшләй, ҡала халҡы 277-09-11 номерына шылтыратып, ҡасан йылытыу миҙгеле башланыу тураһында һорай ала. Бынан тыш, өфөләр идара итеүсе компанияға йәки торлаҡ милекселәре ширҡәтенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Иҫәпләнгән сумма буйынса һорауҙарҙы ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмаларға йәки ЕРКЦ-ға еҫәрергә була. Республика халҡы фатирҙарҙы йылытыуға бәйле һорауҙарын торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетының тәүлек әйләнәһенә эшләгән (347) 294 - 94-00 телефонына шылтыратып та әйтергә мөмкин.

✓Өфөнөң Дим районында "Батыр" хәрби-патриотик паркы ойоштоорола. "Орион" ижад һарайы скверында спорт ҡоролмаларын ҡороу башланды. "Беренселәр хәрәкәте" тип аталған шәхси балалар баҡсалары селтәре проекты федераль грант конкурсында еңеү яулаған. Парк зонаһы ҡаршылыҡтар һыҙаты элементтарынан тора, унда уҡыусылар һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн спорт һәм патриотик саралар уҙғарыу күҙаллана. Унда шулай уҡ "Геройҙар аллеяһы"н булдырып, 30 төп ҡарағай ултыртырға йыйыналар.

✓Өфөлә "Динамо" ойошмаһының 100 йыллығына арналған волейбол буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары башланды. Билдәле булыуынса, Башҡортостандың баш ҡалаһына Рәсәйҙең 15 төбәгенән 15 волейбол командаһы килде. Быңдай ярыштар күпселек волейболсылар өсөн олимпия пъедесталына күтәрелеү юлында мөһим этап һәм ныҡлыҡҡа һынау булып тора.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Башҡортостан республикаһы үҙаллы ерле автономия сифатында танылыу табып өлгөргән була, үҙ биләмәләрен Рәсәйҙең бер өлөшө итеп иғлан итә.*



*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ ҺҮҘ*

# БЕҘҘЕҢ БЕРҘӘМЛЕК...

## дәүләтебеҙҙең ныҡлы нигеҙе ул

**Бынан 33 йыл элек Башҡортостандың яҡын киләсәге өсөн үтә әһәмиәтле булған сәйәси документ - Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителде. Хәҙер ошо иҫтәлекле тарихи ваҡиға йыл һайын Республика көнө тип аталған байрам форматында билдәләнә.**



Тарих ҡабатланып тора, тигән фекер бар. Республикабыҙҙың өр-яңы тарихында 1917 йылдың ноябрь - декабрь айҙарында Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан Башкурдистан милли-территориаль мөхтәриәте (автономияһы) иғлан ителеүе һәм III Бөтөн башҡорт ҡоролтайында раҫланыуы менән бәйле рухи күтәрелеш 83 йылдан һуң яңынан ҡабатланды. Һис шикһеҙ, тарихи күҙлектән ҡарағанда, Башкурдистан мөхтәриәтен Беренсе Республика тип нарыҡлаһаҡ, 1919 йылдың 20 мартында Үҙәк Совет власы менән килешеү нигеҙендә иғлан ителгән Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһын (һуңынан - БАССР) - Икенсе Республика, ә 1990 йылдың 11 октябрендә барлыҡҡа килгән Башҡорт Совет Социалистик Республикаһын Өсөнсө Республика, тип атай алабыҙ.

Башҡортостан Республикаһы Рәсәй Федерацияһы составында айырым урын биләй, уның сәйәси, иҡтисади һәм ижтимағи роле һәм абруйы ил Конституцияһының тейелгеһеҙ юридик нормалары нигеҙендә дәүләт статусына эйә булыуы менән бәйле. Әлбиттә, ҙур суверен дәүләт составындағы дәүләтселек билдәле бер юридик нормалар менән сикләнгән, федератив дәүләт үҫешенең хәҙерге этабында быны башҡаса булыуын әлегә күҙаллап булмай.

Әйтергә кәрәк, Башҡорт иленең боронғо тарихында ла уның билдәле бер дәүләтселек структураһы, күп һанлы айырым ырыу-ҡәбиләләр тормошо менән идара итеү формалары булған. Әлбиттә, ул хәҙерге замандың вертикаль структуралы власынан айырылып торған, сөнки бер уртаҡ атама - башҡорт исемен йөрөткән төрлө сығышлы ырыуҙар үҙ ирке менән бөтөн халыҡ өсөн мөһим булған йәшәйеш ҡанундарын һәр саҡта ла теүәл үтәй килгән. Быны үҙенсәлекле ырыу демократияһы, тип нарыҡлап та була, сөнки дөйөм ырыу йыйындарында, ырыу башлыҡтары кәңәшмәләрендә бөтөн Башҡорт илендә үтәлеүе мотлаҡ булған ҡарарҙар ҡабул ителгән.

Йәнә бына нимә мөһим. Башҡорттар, айырым этнос булараҡ, бик күп быуаттар дауамында (иң кәмендә б.э. I мең йыллығы урталарынан бирле) даими ҡубып торған эреле-ваҡлы бәрелеш-ҡырылыштар, шулай уҡ төрлө баҫҡынсылыҡ яуҙары аша имен-аман үтеп сыға алған һәм үҙҙәре биләгән ерҙәрҙә - Көньяҡ Уралда, унан көньяҡҡа һәм көнбайышҡа табан һуҙылған урман-дала зонаһында төп хужа булып ҡалған. Улар, башҡа ҙур дәүләттәр составында, шул уҡ Алтын Урҙа дәүерендә үҙ биләмәләрендә иркен йәшәп, яһаҡ түләү һәм яугирлыҡ бурысын үтәү менән сикләнеп, телен, динен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап, быуындан-быуынға тапшыра килгән. Хәҙерге терминды ҡулланғанда, тарихи Башҡорт иле хандар власы аҫтында ла ерле автономия статусына эйә була. Ә XVI быуат урталарында, Рус дәүләте составына ингән саҡта ла, батша власы тарафынан бирелгән махсус грамоталар (охранный, оберегательный) нигеҙендә башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы юридик яҡтан нығытып ҡалдырылған. Әйтергә кәрәк, XX быуат баштарына тиклем ғәмәлдә булған аҫабалыҡ феномены Рәсәйҙең башҡа бер халҡында ла булмаған.

XX быуат башында, 1917 йылдың февраль һәм октябрь инҡилаптарынан һуң, йәш сәйәсмән Ә.-З. Вәлиди етәкселегендә бер төркөм башҡорт федералистарының Рәсәй федерализмы өсөн көрәш башлауының әһәмиәтен ахырынаса аңлап, төшөнөп бөтә алмай йөҙәгән сәйәсмәндәр ҙә бар. Улар, Рәсәй унитар дәүләт булып ҡалһа, күпкә яҡшыраҡ, күпкә файҙалыраҡ булыр ине, тигән сәйәси иллюзиянан баш тарта алмай. Йәнәһе, федераль дәүләт төҙөү В.И. Лениндың хаталы ҡарашы арҡаһында ғәмәлгә ашырылған. Шулаймы икән? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта тарихи мәғлүмәтттәргә таянып фекер йөрөтәйек.

Белеүебеҙсә, В.И. Ленин сәйәсәткә ахырынаса инанған марксист сифатында килә. Марксизм тәғлимәте дәүләттәрҙең федератив ҡоролошо хаҡында ниндәй ҡараштә булған? Фридрих Энгельс 1891 йылда ошо хаҡта бына нисек яҙа: "Пролетариат тик берҙәм һәм бүленмәй торған республика формаһын ҡуллана ала. Федератив ҡоролош инде... ҡамасаулыҡҡа әйләнә". Ошо фекерҙе ҡабул итеп, В.И. Ленин үҙе лә әҫәрҙәренең береһендә ошондай һығымтаға килә: "Беҙ федерацияға принципиаль рәүештә ҡаршы торабыҙ - ул ... бер дәүләт өсөн ярамаған хәл тип". Күренекле большевиктарҙың береһе, милли мәсьәләләр буйынса белгес тип иҫәпләнгән Иосиф Сталин хатта 1917 йылда Рәсәйҙең буласаҡ дәүләт ҡоролошо хаҡындағы мәҡәләһен "Федерализмға ҡаршы" тигән баш менән баҫтыра.

Октябрь түңкәрелешенән һуң большевиктар власы дәүләтте Совет Рәсәйе республикаһы йә иһә Советтарҙың Социалистик республикаһы тип атай башлай. Күрәһегеҙ, бында федерация йә иһә союз төшөнсәләре ҡулланылмай.

Әммә сәйәсәт властарҙан һығылмалылыҡ талап итә. Ленин илдә граждандар һуғышы башланыу билдәләрен асыҡ тойомлай, был осраҡта төрлө милләтле унитар дәүләттең тиҙ арала тарҡалыуына юл ҡуймау маҡсатында дәүләт ҡоролошо буйынса большевиктарҙың сәйәси тактикаһын үҙгәртергә ҡарар итә. Милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын танып, уларҙың үҙ республикаларын булдырыуына ҡаршы килмәҫкә өндәй: "Үҙаллы республикалар нисәү генә булмаһын, беҙ бынан хәүефләнмәйәсәкбеҙ, беҙгә дәүләт сигенең ҡайҙан үтеүе түгел, ә ниндәй генә лә булһа милли буржуазия менән көрәштә бөтә милләт хеҙмәтсәндәре араһындағы союздың һаҡланып ҡалыуы мөһим". 1918 йылдың ғинуарында Совет дәүләте юлбашсылары берҙәм һәм бүленмәҫ социалистик республика төҙөү идеяһын ҡалдырып тороп, Рәсәйҙең дәүләт ҡоролошонда федерализмдың маҡсатҡа ярашлы булыуын таныуы хаҡында белдерә. 1918 йылдың 25 ғинуарында Советтарҙың III съезында Рәсәй республикаһы Совет милли республикаларының федерацияһы тип иғлан ителә. Ә был ваҡытта Башҡортостан республикаһы үҙаллы ерле автономия сифатында танылыу табып өлгөргән була, үҙ биләмәләрен Рәсәйҙең бер өлөшө итеп иғлан итә. Аҙағыраҡ, граждандар һуғышының ҡанлы бәрелештәрендә башҡорттарҙың үҙенә ныҡлы союздаш көс булырына инанған Совет хөкүмәте Башҡортостан автономияһын танырға мәжбүр була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙең федератив ҡоролошоноң барлыҡҡа килеүенең объектив тарихи сәбәптәре бар, уны теләһә ниндәй уйҙырмалар менән инҡар итеү мөмкин түгел. СССР исемле бөйөк державаның тарҡалыуында, башҡа сәбәптәр менән бер рәттән, союз федерализмының ҡаҡшауына юл ҡуйыу ҙур роль уйнағандыр. Тап федерализм принциптары нигеҙендә төҙөлгән күп милләтле Рәсәй дәүләте, XX быуаттың һуғыш касафаттары, башҡа ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы үтеп, йәшәүен дауам итә. Тап шуға күрә Башҡортостанға һәм башҡа милли республикаларға ҡырын ҡараусы сәйәсмәндәрҙеңни тиклем хаталы һәм дөйөм дәүләт өсөн зыянлы позиция биләүҙәрен фаш итеү фарыз.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Матдәләр алмашыуы

❖ Матдәләр алмашыуы боҙолған осраҡта 100-әр грамм ромашка, һары мәтрүшкә (зверобой), шиңмәҫгөл (бессмертник), ҡайын бөрөһө һәм күгүлән (спорыш) алып, ҡәһүә тартҡыста онтаҡларға, эмалле кәстрүлгә һалып, ауыҙын ябып тоторға. Кәрәк булғанда, 1 ҡалаҡ әҙерләмәгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр - иртәнсәк-кис эсергә. Иртәнсәк төнәтмәнең 1 стаканын йылытырға, 1 балғалаҡ бал ҡушырға һәм ашарҙан 15-20 минут алда эсергә. Кискегә шулай уҡ 1 стакан йылы төнәтмәгә бал ҡушып эсергә лә, аҙағынан башҡа бер нәмә лә ашамаҫҡа кәрәк. Шифалы үлән әҙерләмәһе бөткәнсе ошо рәүешле көн һайын дауаланырға. Шунан 3-4 йылдан һуң ғына дауаланыуҙы кире ҡабатларға була. Был организмды таҙартырға һәм матдәләр алмашыныуын көйләргә ярҙам итә.

### Тымау

❖ Таҙа йылы һыу менән сайҙырыу ярҙам итә. Усҡа һыу йыйып, башта танауҙың бер, аҙаҡ икенсе ҡыуышлығына һурырға.

❖ Шырпыға мамыҡ урап, балға манырға һәм танауға тығырға. Шул рәүешле 10-15 минут йөрөгәс, тын алыуы еңелләшер.

❖ 1 балғалаҡ тоҙҙо ярты стакан йылы һыуҙа иретеп, танауҙы сайҙыртырға. Шунан 3-5 тамсы алоэ һуты тамыҙырға.

❖ 2 ҡалаҡ ҡырылған һуған йәки һарымһаҡты стаканға һалып, эҫе һыулы һауыт эсенә ҡуйырға, өҫтөнән ҡалын ҡағыҙҙан яһалған буранка яһап, шуның нәҙек яғын танауға тығырға һәм 10-ар минут һулап ултырырға. Быны көнөнә 3-4 тапҡыр ҡабатларға кәрәк.

### Аҙ ҡанлылыҡ

❖ 1 ҡалаҡ шифалы иссоп үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Өҫкә бүлеп, ашарҙан 20 минут алда эсергә. Хәл яҡшырғанға тиклем дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡыҙыл муйынлы ҡаҙ**
**(Краснозобая казарка)**



Ҡаҙ кеүектәр ғаиләһенә һыу буйында көн иткән күп кенә ҡоштар ҡарай. Шуларҙың араһында ҡаҙҙар төркөмө ҙур урын алып тора. Ҡыҙыл муйынлы ҡаҙ унын иң киң таралғаны. Кәүҙәһе уртаса. Ул был төркөмдәге башҡа ҡоштарҙан бик сағыу - төҫө аҡ, ҡара, һорғолт-ҡыҙыл төҫтә булыуы менән айырылып тора. Суҡышы бәләкәй, ҡара төҫтә. Башы ике яҡтан ерән, аҡ ҡайма менән уратып алынған. Ҡара ҡорһағы һәм ҡабырғалары, ҡабырғаларынан өҫтәрәк аҡһыл һыҙаты алыҫтан уҡ күренеп тора. Муйыны, боғаһы ерәнерәк, сикәләре аҡ таплы. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 53-56 см. Ҡанаттарын йыш елпеп, ҙур тиҙлектә оса.

Башлыса Таймырҙа йәшәй, ҡуҙаҡлылар, тамырҙар менән туҡлана. Бик ығы-зығылы, тауышлы ҡош. Яҡшы йөҙә һәм сума.

Уралда осрамай, бары тик осоп үтеп барышлай ғына туктап китә. Шиңгәккүл менән Асылыкүлдә (1897) көҙөн күренгән. С. Приклонский 1965 йылда Ағиҙел буйында яҙ күргән. Аҙаҡҡы йылдарҙа 2003 йылдың көҙөндә Бишбүләк районында урындағы халыҡ осраткан. Шулай уҡ Дим буйында ла күренгеләп ҡалған. Шулай уҡ Ырымбур территорияһы буйлап осалар һәм туҡтап китәләр.

Яҙын башҡа ҡоштарға ҡарағанда һуңыраҡ оса. Көҙөн дә башҡа ҡоштар китеп бөткәс ҡуҙғала. Каспийҙа, Ҡара диңгеҙ ярҙарында, Дунайҙа һәм артабан Африканың төньяғын тиклем ҡышлай. Халыҡ-ара тәбиғәтте һаҡлау берлегенен, шулай уҡ Рәсәйҙең Ҡыҙыл китаптарына ингән. Башҡортостанда һирәк осраһа ла, беҙҙә лә ул аҙ ҡалған ҡоштар исемлегендә, шулай уҡ Ҡыҙыл китапҡа индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# СИЛӘБЕЛӘГЕ МИЛЛӘТТӘШТӘР...

## иғтибарҙан ситтә түгел

**Быйыл Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге булдырылыуға 25 йыл тулды. Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнештә булған төбәктә Вәкиллеккәниндәй бурыстар йөкмәтелгән? Милли мөхит булдырыу ниндәй кимәлдә? Башҡортостандың Силәбелэге рәсми вәкиле Әлфир Зөлфәр улы БАЙЫМОВ менән әңгәмәбеҙ ошо юҫыкта ҡоролдо.**



**➔ Вәкиллеккә йөкмәтелгән бурыстар ниндәй?**

- Урал федераль округын һәм Пермь өлкәһен үҙ эсенә алған Вәкиллек алдында торған тәүбурыстарҙың береһе - ике өлкә араһында тығыҙ бәйләнеш урынлаштырыу, дәүләт органдарының әүҙем берҙәм эшмәкәрлеген тәьмин итеү һәм сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни өлкәләге мәнфәғәттәрен күҙаллаған эшмәкәрлекте булдырыуға, уны үҫтереүгә һәм нығытыуға ҡайтып ҡала. Әйтергә кәрәк, Силәбе өлкәһендәге Башҡортостан вәкиллеге әлеге көндә эшләп килгән бер-ҙән-бер төбәк вәкиллеге, башҡа төбәктәге вәкиллектәр үҙ эшен туҡтатты. Көньяҡ Урал башҡорттарҙың тарихи ватаны икәнен күҙ уңында тотоп, республика етәкселеге Силәбеләге вәкиллектең эшен туҡтатмаҫҡа ҡарар итте. Ошо ерҙәрҙә башҡорт халҡы мәҙәни, тарихи, географик йәһәттән формалашҡан. Мәҫәлән, Силәбе ҡәлғәһенә 1736 йылда табын ырыуы башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә, Шаимов Таймас тархандың ауылы урынында нигеҙ һалына. Әлеге мәлдә Силәбе өлкәһендә йөҙ меңдән ашыу башҡорт Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка, Сыбаркүл, Нязепетровск, Красноармейск һәм Верхнеуфалей ҡала округтарында тупланып йәшәй.

**➔ Сығышы менән Силәбе өлкәһенән булған билдәле шәхестәр тураһында ла ишетергә ине.**

- Был өлкә менән күп кенә билдәле башҡорттарҙың тормошо һәм яҙмышы бәйле. Улар араһында Троицк ҡалаһында йәшәгән һәм эшләгән Зәйнулла ишан Рәсүлев, башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулла, мәғрифәтсе, күренекле дини, сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәре Мөхәммәт Ҡорбанғәлиев, 18-19-сы быуаттың дәүләт эшмәкәрҙәре, илселәр Таймаҫ Шәһимов, Мөхәммәтҡолой Кучуков, Дәүләтша Бикмәтов, 20-се быуат вәкилдәре Абдулҡадир Инан, Хафиз Ҡушаев, Нуриәғзәм Таһиров, Таймаҫ Шафиҡов һәм башҡаларҙы билдәләп үтергә була. Замандаштарҙан иһә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы Ҡадир Даянды, Хәй Мөхәмәтйәров, Кәтибә Кинйәбулатова, ғалимдар Зәйнулла Иҡсанов, Дамир Вәлиев, Ҡадир Тимерғәзинде әйтеп үтергә кәрәк. Сығыштары менән Силәбе өлкәһенән булған байтаҡ милләттәштәребеҙ спорт өлкәһендә лә ҙур уңыштар яулай. Улар араһында көрәшсе, Силәбелә дзюдо буйынса Көньяҡ Урал мәктәбенә нигеҙ һалыусы Харис Йосопов, спорт һәм сәләмәт тормош алып барыуҙы пропагандалаған, Рәсәйҙең иң көслө спортсыһы исемен йөрөтөүсе Эльбрус Нигмәтуллин һәм башҡалар бар.

**➔ Башҡорттар тығыҙ тупланып йәшәгән был төбәктә этник һәм мәҙәни өлкәлә ниндәй эшмәкәрлек алып барыла?**

- 2015 йылда Башҡортостан менән Силәбе өлкәһе араһында фәнни-иҡтисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Беҙҙең эшмәкәрлек нигеҙендә ошо документ ята. Башҡортостан менән Силәбе өлкәһенең ике яҡлы хеҙмәттәшлегенең оҙайлы нигеҙҙә булыуы тарихи яҡтан нығынған. Бөгөн Силәбе өлкәһе, Башҡортостандан ҡала, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр араһында икенсе урында тора. Рәсәйҙә үткән халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә ярашлы, Силәбе өлкәһендә 120 меңдән ашыу башҡорт йәшәй.

Вәкиллек алдында тәү сиратта мәҙәниәт һәм белем биреү өлкәһендә эшлекле бәйләнеш булдырыу һәм нығытыу бурысы тора. Һәм был йәһәттән күп эштәр башҡарыла. Силәбе өлкәһендә 32 мәктәптә яҡынса өс меңдән ашыу уҡыусы башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнә. Башҡортостан был мәктәптәрҙе тулыһынса уҡыу-методик әҙәбиәт, күргәҙмә әсбап, стенд һәм кадрҙар менән бушлай тәьмин итә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары даими рәүештә квалификация күтәреү курстары үтә. Шулай уҡ йыл һайын уҡытыусылар өсөн күсмә семинар һәм курстар ұҙғарыла, уҡыу йылы барышында улар республикаға килеп, төрлө төбәк-ара фәнни-практик конференцияларҙа һәм башҡа төрлө сараларҙа ҡатнаша, уҡыусыларын башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән үткән олимпиадаларға алып килә. Төбәктә Силәбе һәм Ҡурған өлкәһендә эшләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Ассоциацияһы булдырылған. Силәбе өлкәһендә йыл һайын республика тарафынан башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттар тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ беҙ һабантуй, балалар өсөн оҫталыҡ дәрестәре, Башҡорт мәҙәниәте һәм әҙәбиәте көндәрен уҙғарыуҙа әүҙем ҡатнашабыҙ.

Республика Силәбе өлкәһендә йәшәп ижад итеүселәрҙе лә күтәрмәләп тора. Мәҫәлән, "Ватандаш" журналы күптән түгел Силәбе өлкәһе Арғаяш районында йәшәүсе башҡорт яҙыусыһы Рәшит Хәкимовтың "Япон мулла, йәки Имамдың ауыр юлы" исемле яңы романының исем туйын үткәрҙе. Башҡорт мәғрифәтсеһе, дини, сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәре, имам Ҡорбанғәлиев Мөхәммәт-Ғабдулхай Ғәбиҙулла улына арналған роман ағымдағы йылда журналдың биш һанында донъя күрҙе.

Республика етәкселегенең башҡорт һәм төбәктә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың теленә иғтибары ҙур булыуы ҡыуандыра. Был йүнәлештә эшләргә теләгәндәргә республика Башлығы гранттары буленеүе лә ошо хаҡта һөйләй. Һәм иң мөһиме, гранттар тик Башҡортостан менән генә сикләнмәй. Мәҫәлән, быйыл Силәбе, Свердлов, Ҡурған өлкәләре һәм Пермь крайынан тәҡдим ителгән проекттар республика Башлығы гранттары конкурсында еңеү яуланы. Шулай итеп, 4,5 миллион һум ошо төбәктәрҙә телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтеләсәк.

**➔ Ике өлкәләге хеҙмәттәшлектең шулай уҡ иҡтисади йәһәттән дә ныҡ булыуы шарттыр?**

- Һис шикһеҙ, ике төбәк араһындағы хеҙмәттәшлек тик мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәһенә генә ҡағылмай. Иҡтисад өлкәһенә килгәндә, тәү сиратта, ике төбәк предприятиелары араһында тығыҙ бәйләнеш булдырыуға ҡайтып ҡала. Төп бурыс - кооперация бәйләнештәре һәм тура партнерлыҡ мөнәсәбәттәре булдырыу. Башҡортостанда етештерелгән продукцияны Силәбе өлкәһенә сығарабыҙ. Әлеге мәлдә 600-ҙән ашыу республика етештереүселәре күрше өлкәлә үҙҙәренең продукцияһын һатыуға сығара. Башҡортостанда сифатлы һәм экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлек етештерелеүе совет ваҡытынан уҡ билдәле һәм бөгөнгө көндә лә беҙҙең етештереүселәр ошо кимәлдән төшмәй.

Республика менән Силәбе өлкәһе араһындағы тағы ла бер мөһим йүнәлеш тураһында әйтеп китеү кәрәктер. Башҡортостандың өлкә менән сиктәш булыуы республика халҡының күпләп бында эшкә килеүенә булышлыҡ итә. Милләттәштәребеҙ төрлө өлкәлә эшләй һәм үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәтә, шуға күрә күршеләр Башҡортостандан килгән эшселәрҙе һәм белгестәрҙе ҡуш ҡуллап ҡабул итә. Силәбе өлкәһендә эш табыуы еңелерәк булыуын күҙ уңында тотоп, өлкәнең эш биреүселәре республикала вакансиялар йәрминкәһе ойоштора. Күптән түгел Дыуан районында үткән ошондай сарала өлкәнең тау-завод зонаһында урынлашҡан 10 ойошмаһы эш урындары тәҡдим итте. Шулай уҡ өлкәнең "Завод пластмасс", "ЧТЗ", "УралАЗ" предприятиелары республиканың техник юғары уҡыу йорттарында белем алыу өсөн үҙҙәренән маҡсатлы йүнәлтмәләр бирергә әҙер булыуы тураһында ла белдерҙе. Был иһә, диплом алғас уҡ йәш белгескә эш урыны буласағы тураһында һөйләй.

Силәбе эшҡыуарҙары республиканың төрлө өлкәһендә эшләргә әҙер. Мәҫәлән, Өфө - Ырымбур һәм М-5 Урал трассаларында юл яны сервисына инвестиция индереләсәк. Инвестиция күләме 10 миллион һумдан ашыу буласаҡ. Ошо һәм башҡа проекттар ике төбәк араһындағы иҡтисади хеҙмәттәшлектең ныҡ булыуын тәьмин итә.

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

✔ *Ғүмеребеҙҙең ошо ун йылын иҫкә төшөргән һайын, уҡытыусыларыбыҙға рәхмәттәр әйткем килә. Улар беҙҙе төрлө форматтағы йолалар менән таныштырҙы, уларға ылыҡтырҙы.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### III - IV быуаттарҙа Көньяҡ Урал далаларындағы тарихи шарттар

Көньяҡ Уралда хасил булған барса ҡаласыҡтар "ҡала" һүҙе ингән һүҙбәйләнештәр менән аталып йөрөтөлгән, ә археологтар тарафынан улар ике сәбәп арҡаһында теркәлмәй ҡалған: а) йә улар ошо хаҡта халыҡтан һорашып тормаған, б) йә иһә урындағы халыҡ был турала бер ни ҙә белмәгән. Ғәмәлдә былдай мәғлүмәттәр бары урындағы башҡорт халҡында ғына һаҡланып ҡалған, улар ата-бабаларының тарихи хәтеренә һаҡсыл мөнәсәбәттә була. Әле бәйән ителгән мәғлүмәттәргә өҫтәп, тағы ла бер иғтибарға лайыҡ фактты килтереп була:

Урта Волга буйы ҡаласыҡтары, күрәһең, шулай уҡ "ҡала" һүҙе менән аталып йөрөтөлгән. Миҫал өсөн б.э. IV - IX быуаттарына ҡараған тотош бер мәҙәниәткә исем биргән Именьков ҡаласығын атарға була. Ошо ҡаласыҡ атамаһының ике өлөштән - "имень (имән)" һәм "ко (ҡала)" һүҙҙәренән хасил булғанына төшөнөүе ҡыйын түгел. Көньяҡ Урал ҡаласыҡтарының боронғо ҡатамаларын асыҡлау күп нәмәләр хаҡында һөйләй. Беҙгә әҙәби сығанаҡтарҙан Көньяҡ Ҡаҙағстан, Урта Азия биләмәләренең бар булған тип әйтерлек боронғо һәм иртә урта быуаттар ҡалғалары һәм ҡаласыҡтары атамаларының "ҡала" һүҙе менән тамамланыуы билдәле (мәҫәлән, Ҡыҙ-ҡала, Каваt-ҡала һ.б.). Был атамалар Көньяҡ Уралдағы "ҡалатау" ҡаласыҡтарына тулыһынса тап килә. Бында оҡшашлыҡ топонимик атамаларҙа ғына түгел, тип уйларға кәрәк.

Ошо айҡанлы Көньяҡ Уралдың дала һәм таулы-урманлы райондарының боронғо дәүерҙәң күп меңйыллыҡтары дауамында үрҙә аталып киткән төбәктәрҙең күсмә ҡәбиләләре өсөн көтөүлектәр булыуы һәм көньяҡ менән сауҙа-иҡтисади, сәйәси, этник бәйләнештәрҙең әүҙемлеге кимәле менән Көньяҡ Урал халыҡтарының ижтимағи-сәйәси, этномәҙәни үҫеш кимәле бәйле булыуы хаҡында иҫкә алыу артыҡ булмаҫ.

Ошо хәлдәрҙе иҫәпкә алып, беҙгә Көньяҡ Урал ҡаласыҡтарының ("ҡалатау"ҙарының) ошондай бәйләнештәрҙең туранан-тура йоғонтоһо һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгәнлеге һәм көньяҡ аналогтарындағы кеүек үк ижтимағи функциялар үтәгәнлеге хаҡында тулы нигеҙле фекер йөрөтә алабыҙ. Бер үк ваҡытта ошо мәҙәни яҡынлыҡ аталған төбәктәр ҡәбиләләре араһындағы яҡын нәҫелдәшлек бәйләнештәрен сағылдыра. Шулай итеп, "ҡала-тау" төшөнсәһе Көньяҡ Урал ҡаласыҡтарының боронғо тәбиғи асылын (йөкмәткеһен) тулыраҡ аса. Ҡаласыҡ атамаларына ошондай аныҡлыҡ индереү зарурлығына тағы бер сәбәп булып Төньяҡ Дала Евразияһының урман-дала зонаһы археологтары практикаһында ҡала төшөнсәһенең хәҙерге эре сәнәғәти ҡалалар мәғәнәһендә интерпретацияланыуы торҙо, ә быны методик яҡтан ҡабул итеп булмай.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ҺҮҘ - УҠЫТЫУСЫҒА

# ЙОЛАЛАРЫБЫҘ...

## беҙҙе һаҡлай



**Башҡорт халҡының тарихы бай. Халҡыбыҙ үҙенең тарихи үҫешендә нимә генә күрмәгән, нимә генә кисермәгән. Ҡайһы ваҡыт ошоларҙы иҫкә төшөргән саҡта, аптырап, үҙемә-үҙем: "Халҡым нисек итеп быларҙың бөтәһен дә үткәрә, кисерә алырға көс тапҡан һуң?" - тигән һорау бирәп ҡуям. Түҙемле, сыҙамлы булған халҡым, киләсәккә булған яҡты өмөтөн юғалтмаған! Оло яуаплылыҡ тойғоһо менән киләсәк быуындарҙы ҡайғыртып йәшәгән!**

Минеңсә, халҡымдың тарихи үҫеше, уның булмышы йола культына нигеҙләнә. Башҡорт өсөн "йола" тигәнең изге төшөнсә. Беҙ быны бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, аңлайбыҙ. Минең тормошта ул "йола" тигәнең тик файҙаға ғына булды. 1970 йылда Өфөлә башҡорт зыялыларының тырышлығы менән 20-се ҡала башҡорт мәктәбе асылды. Ошо юлдарҙың авторы был мәктәптә беренсе кластан алып унынсы класҡа тиклем уҡыу бәхетенә ирешде. Хәҙер инде мәктәпте тамамлауыбыҙға ла ҡырҡ өс йыл булып киткән. Ғүмеребеҙҙең ошо ун йылын иҫкә төшөргән һайын, уҡытыусыларыбыҙға рәхмәттәр әйткем килә. Улар беҙҙе төрлө форматтағы йолалар менән таныштырҙы, уларға ылыҡтырҙы. Башланғыс кластарҙы ғына алайыҡ. Ул саҡта 23 февраль көнө һәр класс хәрби парадта ҡатнаша ине: үҙенең генә һайлаған формаһы, йыры, девизы була торғайны. Был байрамды йыл буйы көтөп ала инек, ата-әсәләр ҙә ситтә ҡалмай, улар беҙгә әҙерләнергә ярҙам итәләр ине. Хәрби парад мәктәптең спорт залында үтә торғайны. Парад һәр ваҡытта данлыҡлы 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы (элекке 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы) 148-се артиллерия-миномет полкының командиры, полковник Сәйфулла Хәлил улы Хәбировтың сығышынан башлана. Ул дивизияның данлы хәрби юлы тураһында телмәр тота, генерал М. Шайморатов тураһында ла бәйән итә. Аҙаҡ инде һәр бер сығышҡа баһа бирә. Беҙ кисен мәктәптән ҡайтыу менән атай-әсәйҙәребеҙҙән үҙебеҙҙең һуғышта һәләк булған картатайҙарыбыҙ тураһында һорашабыҙ, уларҙың ошо дивизия сафтарында фашистарҙы дөмбәсләүен белгәс, ысын күңелдән шатланабыҙ. Тимәк, ошо хәрби парад кеүек мәктәп йолаһы яңы ғына уҡыуҙарын башлаған балаларҙың күңелендә үҙ иленә, халҡына, уның хәрби юлына ҡарата ҙур һөйөү уята башлай. Тора-бара уҡыусы балала үҙ халҡы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә.

Уртансы кластарҙа пионерҙар сафына баҫтыҡ. Һәр отрядтың үҙ исеме булды: Салауат Юлаев, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Муса Гәрәев... Былары бөтәһе лә башҡорт балаһы өсөн изге исемдәр. Тимәк, уҡыусы бала, пионерҙар сафында тороп, ғүмеренең дүрт йылы дауамында үҙ халҡының арҙаҡлы улдары, уларҙың тормошо, хәрби юлы тураһында байтаҡ мәғлүмәт ала. Был иһә пионер тормошондағы төрлө саралар, йолалар аша бирелә. Эйе, уҡытыусы уҡыусы баланы дәрестә лә тәрбиәләй, кластан тыш сараларҙа ла. Хәҙер инде ғорурлыҡ тойғоһона яйлап яуаплылыҡ тойғоһо өҫтәлә башлай. Шулай итеп, уҡыусы бала үҫмер корона етеүгә, төрлө форматтағы изге йолаларҙың йоғонтоһо арҡаһында рухлы шәхесҡә әүерелә.

1989 йылдың ғинуар айында Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт филологияһы факультетында эш башланым. Бында инде яҙын, көҙөн кафедра мөдире Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинованың тәҡдиме менән "Башҡорт мәҙәниәте айлыҡтары" тигән сараны үткәреү юғары уҡыу йортонон изге йолаһына әйләнеп киткәйне. Был сараның программаһы ла бик ҙур ғына: стена гәзиттәре конкурсы, тематик кисәләр, театрға барыу һәм ҡараған спектаклгә инша рәүешендә рецензия яҙыу, шаирҙар һәм тапҡырҙар конкурсы, яҙыусылар, артистар менән осрашыу. Иң мөһиме - башҡорт халҡының берәй йолаһын күрһәтеү. Ошо "айлыҡ" тигән изге йола буласаҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын формалаштырыуҙа ҙур роль уйнаны. Хәҙер инде ошо айлыҡ мәктәбен үтеүсе студенттар бөгөнгө көндә республикабыҙҙа танылған ғалимдар, журналистар, атҡаҙанған уҡытыусылар. Эйе, был йола уларҙы рухи яҡтан ныҡ үҫтерҙе, оло юлға тәплә итеп әҙерләне. Был йәһәттән яҙыусыбыҙ, башҡорт халыҡ педагогикаһының әйҙәүсе белгесе Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаеваны лә телгә алып китергә була. Уның "Йәйләү" этнолагерын ғына алайыҡ. Йола культының дөрөҫ һәм урынлы өҫтөнлөк итеүе бында ял итеүсе балаларҙы рухлы шәхес итеп формалаштыра ла инде.

Мин халҡыбыҙҙың тарихи үҫеше юҫығынан ҡарағанда бер бәләкәй генә кешемен. Әммә үҙемдең шәхси ҡарашымды шулай тип дәлилләгем килә: йәш быуынды үҙебеҙҙең йолаларыбыҙға ныҡлап йәлеп иткәндә, халҡыбыҙҙы ла һаҡлап ҡаласаҡбыҙ...

**Юлай ПСӘНЧИН,**
**филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Тәбиғи фәндәр академияһы ағза-корреспонденты.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

16-сы гв. атлы дивизияһы командирының 1943 йылдың 25 декабрендәге бойороғона ярашлы 160-сы танк полкы танкистары Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә: Т-34 танкы башняһы командиры, кесе сержант Андронов Вячеслав Борисович танк пушкаһынан мәргән атып, дошмандың бер нисә пулемет нөктәһен сафтан сығара, 15-ләп һалдатын һәм офицерын юҡ итә. Ярославль ҡалаһында тыуып үҫкән Бегунов Валентин Иванович Днепр йылғаһының уң яры буйындағы Надвин ауылы янындағы алышта немецтарҙың автомашиналарын, обоздарын ҡыйрата, әммә дошман снаряды тейеп яңа башлаған танк эсендә һәләк була. Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусылар исемлегендә башҡа танкистар ҙа бар: Т-34 танкыһының башня командиры Володчиков Василий Владимирович (Смоленск өлкәһенән); өлкән сержант, Т-70 еңел танкыһының механик-водителе Игнатенко Д. Ф. (Алтай крайынан); сержант, Т-34 танкыһының механик-водителе Путилов Аркадий Григорьевич (Куйбышев өлкәһенең Подбельский районынан); танк взводтары командирҙары, лейтенанттар Синицын А. Н., Силин П. А. һәм Порубара И. А.

Шулай уҡ Ҡыҙыл Йондоҙ ордены 148-се артминполктың 4-се миномет батареяһының ут взводы командиры, гв. өлкән сержанты Дәүләтов Сөләймән Латип улына (Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан), 60-сы гв. атлы полкы разведчигы Коновалов Илья Еремеевичҡа (Киров өлкәһенән) тапшырыла.

1943 йылдың ноябрь-декабрь айҙарында һәм 1944 йылдың ғинуарында батырлыҡ өлгөләре күрһәткән яугирҙәр, дивизияның полк командирҙары бойороҡтарына ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә. 60-сы гвардия атлы полкы яугирҙарынан танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡ (ПТР) наводчигы Низаметдинов Ғизетдин Ғиләжетдин улы алыштарҙың берәһендә боеприпастар менән тулы дошман автомашинаһын сафтан сығара (Әлшәй районының Ибрай ауылынан), уға "Батырлыҡ өсөн" миҙалы тапшырыла; ПТР наводчигы Төхвәтуллин Хәснулла Төхвәт улы (Байҡыбаш районының Һөйөндөк ауылынан), 2-се эскадрон ҡылыссыһы, гвардия рядовойы Хлутов Мозаһит Хлут улы (Баҡалы районы Мостафа ауылынан), 3-сө эскадрон ҡылыссыһы, гв. рядовойы Кашапов Мирсәйет Кашаф улы (Нуриман районының Иҫке Исай ауылынан), станковый пулеметтың 2-се номеры, гв. рядовойы Хәмиҙуллин Әхәт Ғәзи улы (Йәрмәкәй ауылынан) шул уҡ миҙалға лайыҡ була.

62-се гв. атлы полкы яугирҙарынан "Батырлыҡ өсөн" миҙалы гв. рядовойы, 20-се ПВО гв. дивизионының ДШК эре калибрлы пулеметының 1-се номеры Кочкин Егор Ивановичҡа (Өфө ҡалаһының Сталин районынан), 76-миллиметрлы батарея старшинаһы ярҙамсыһы Әхмәҙуллин Ғабдрахман Хәйрулла улына (Шишмә районының Сәфәр ауылынан), гв. рядовойы, телефонист Горбунов Александр Михайловичҡа (Аҫҡын районының Уршәҙе ауылынан), гв. рядовойы, элемтә взводы телефонисы Әхмәҙиев Ғәли Мөхәмәҙи улына (Шаран районынан), химик һаҡланыу взводының гв. рядовойы Батыров Сәмиғулла Ғәскәр улына (Благовещен районының Иҫке Торбаҫлы ауылынан) тапшырыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Шуныһы хәтеремдә: мәктәптәге дәрестәрҙән һуң йә музыка мәктәбенә йөрөйөм, йә волейбол, баскетбол, аэробика менән шөғөлләнәм, әммә өйҙән сығып китер алдынан мотлаҡ һыйырыбыҙҙы ашатып, һыу эсереп китергә тейешмен.*



**Сираттағы әңгәмәбеҙ ҡәҙимге башҡорт ауылында тыуып үҫеп, идара итеү һәм сәйәсәт өлкәһендә Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡан данлы яҡташыбыҙ, билдәле сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре Лилиә Салауат ҡыҙы ҒҮМӘРОВА менән.**

**▸ Ырыуығыҙ, затығыҙ, тыуып үҫкән ер-һыуығыҙ менән таныштырайыҡ әле башта гәзит уҡыусыларыбыҙҙы...**

- Мин Учалы районы ҡыҙы, беҙ тиләү ырыуына ҡарайбыҙ. Шәжәрәмде, ата-бабаларымдың кемдәр булғанын арыу ғына беләм. Нисек кенә булмаһын, мин был мәғлүмәттәрҙе мотлаҡ балама, ейән-ейәнсәрҙәремә лә тапшыра аласаҡмын. Ҡыҙым менән был турала гел әңгәмәләшеп торабыҙ, ул тамырҙарыбыҙ турында ҡыҙыҡһына, әлеһәнәле һорауҙар бирә. Ҡыҙыма туған телебеҙҙе - башҡорт телен белеү мөһим икәнен бөләҡәй сағынан уҡ аңлата килдем. Ул Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡгендә - Уральск ҡасабаһында йәшәнек. Заманында Әҙһәм Шәрәфетдинов етәкселегендәге "Байрамғол" совхозы миллионер булды, даны тирә-яҡта гөрләп торҙо. Урта мәктәп, музыка мәктәбе, балалар баҡсаһы бар ине, атлы спорт клубы, башҡа төрлө спорт һәм сәнғәт түңәрәктәре эшләне. Атайым "Колхида" маркалы йөк машинаһында йөрөнө, уны водителдәр "үлемесле машина", тип атаған икән: үҙе һыуыҡ, тиҙ ватылыусан, ә атайымды ярты-шар, хатта берәр айға әллә ҡайҙарға командировкаға ебәрәләр. Уның шундай тырыш, түҙемле булғанына хайран ҡалырлыҡ ине. Шул уҡ ваҡытта ул бик музыкаль кеше булды, китаптар уҡырға яратты.

саҡта ҡайһы бер китаптарҙы уҡыйым-уҡыйым да, бер ни ҙә аңламайым, әммә барыбер китап уҡыуҙан ваз кисмәйем. Нисек кенә итеп иҫкә алһаң да, бала сағыбыҙ бик бәхетле булған: походтарға йөрөнөк, түңәрәктәрҙә, спорт секцияларында шөғөлләндек. Байрамдарҙа сығыш яһарға булһаҡ, әсәйем төнө буйы ултырып, беҙгә костюм тегер ине.

Атай-әсәйебеҙ беҙҙе йорт эштәренә лә йәлеп итте, бала саҡтан эшкә күнегеп үҫтек. Шуныһы хәтеремдә: мәктәптәге дәрестәрҙән һуң йә музыка мәктәбенә йөрөйөм, йә волейбол, баскетбол, аэробика менән шөғөлләнәм, әммә өйҙән сығып китер алдынан мотлаҡ һыйырыбыҙҙы ашатып, һыу эсереп китергә тейешмен. Әсәйем гелән: "Эшлә, балаҡайым, эштән бер кем дә үлмәгән", - тип әйтер ине. Беҙ бер эшһеҙ урамда йөрөмәнек, ваҡыт ҡалмай ине уның өсөн. Мин хәҙер ҙә Уральскийҙа йә-

**▸ Лилиә Салауат ҡыҙы, һеҙ башҡортса бик һәйбәт һөйләшәһегеҙ. Мәктәбегеҙҙә башҡорт теле уҡытылдымы?**

- Беҙҙең мәктәптә 1-се класс балаларын барыһын да бер уҡыу планы буйынса уҡыттылар, башҡорт теле предметы булманы. Шунан, 2-се кластан башлап, уҡыусылар 3 төркөмгә бүленә ине: "А" класында башҡорт теле аҙнаһына 2-3 сәғәт уҡытыла башлай, "Б" класында башҡорт теле уҡытылмай, ә "В" класында ауылдарҙан килгән башҡорт балалары тулыһынса башҡорт телендә уҡыны, ә рус теле һәм әҙәбиәтен предмет булараҡ өйрәнде. Мәктәбебеҙҙең интернаты булды ул саҡта, мәктәп автобусы менән дә уҡырға йөрөнө ауыл балалары. Оло кластар оҙағыраҡ уҡый, ә бәләкәйерәктәр уларҙың дәрестәре, кластан тыш эштәре бөткәнсе, сәғәт 4-тәргә тиклем көтөп ултыра ине.

булманы, шуға күрә башҡортса интервью бирер алдынан ныҡлап әҙерләнергә тура килә.

**▸ Мәктәптән һуңғы юлдар ҡайҙарға илтте?**

- Әсәйем партия ағзаһы булды, күп итеп гәзит-журналдарға яҙылды. Мин шуларҙы уҡып, шунда яҙылғандарға ышанып, идеялы кеше булып үҫкәнмендер инде. Ә шулай ҙа минең уҡытыусы булырға әллә ни теләгем юҡ ине. Хыялым - сәнғәт институтында уҡып, диктор һөнәренә эйә булыу. Инде шул уҡыу йортона инеп бөткөйнем, атайым кирегә дүндерҙе: "Ҡыҙым, сәнғәттә йә беренсе булырға, йә бөтөнләй ул өлкәгә аяҡ баҫмаҫҡа кәрәк", - тине. Атайымдың һүҙен тыңланым, пединиститутның тарихи-хоҡуҡи факультетына инергә булдым. Бер имтиханды "биш"кә, икенсеһен "дүрт"кә бирһәм дә, конкурстан үтеп булманы: армиянан ҡайтҡан егеттәрҙе конкур-

# ЛИЛИӘ ҒҮМӘРОВАНЫҢ

## йәки Хеҙмәттә



ыны, ике телде лә бик һәйбәт үҙләштерҙе. Ә бит беҙҙең ҡайһы бер күренекле генә зыялыларыбыҙҙың балалары туған телен бөтөнләй белмәй, ниңәлер сит илдәрҙә уҡыуҙы, сит ил телдәрен белеүҙе өҫтөн итеп ҡуя. Әлбиттә, сит ил телдәрен өйрәнеү кәрәк, ләкин был мауығыу, был ынтылыш туған телеңде инҡар итеү иҫәбенә атҡарылмаһын ине.

Атайым хаҡында бер аҙ һөйләп китәйем әле. Уның тулы исем-шәрифе - Салауат Юлай улы Фәтҡуллин. Фамилияһы - әсәһенеке. Тарих былай: атайым Юлай Мортазиндың улы. Беҙҙең Лут олатайыбыҙҙың улдары - Ғайса, Мотал һәм Муса, улар барыһы ла Мортазиндар. Юлай ҡартатайым - Муса Мортазиндың бер туған ҡустыһы Ғайсаның улы (шундай фараз да бар: Юлай Муса Мортазиндың улы булған, уны ҡотҡарып ҡалыу өсөн Ғайсаныҡы итеп күрһәткәндәр, имеш. Әммә был фаразды тикшерәһе бар әле). Үҙегеҙ беләһегеҙ, Муса Мортазин 1937 йылда репрессияға дусар ителә, ул саҡта "халыҡ дошмандары"ның ир туғандарына ла һөйеп тағылып, хөкөм ителә. Шунлыҡтан, Юлай ҡартатайым вафат булғас, репрессия шаулаһенән ҡурҡып, туғандары уны ерләшергә лә килә алмай. Атайым былар хаҡында әллә ни һөйләмәй торғайны. Атайымдың фотоһын Муса Мортазиндың фотоһы менән сағыштырып ҡараһаң, улар бер-береһенә шул тиклем ныҡ оҡшаған. Нисек кенә булмаһын, беҙгә, Муса Мортазин варисҭарына, был туғанлыҡ оло яуаплылыҡ өҫтәй. Шуға күрә Учалыла эшләгән сағымда Муса Мортазин музейын асыу өсөн байтаҡ көс һалынды.

**▸ Бала сағығыҙ Учалы районының ҡайһы ауылында үтте?**

- Беҙ тирә-яҡҡа киң билдәле "Байрамғол" совхозының үҙә-

Ә әсәйем 40 йылға яҡын балалар баҡсаһында эшләне. Ул да китап уҡырға яратты. Ул заманда магазиндарҙан китаптарҙы сират тороп алалар ине бит, әсәйемдең шулай итеп беҙҙең өйҙәң китапханаһын ишәйтеүен беләм. Хатта беҙҙең китап кәштәһендә В.И. Ленин әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы ла бар ине, уларҙы ла ҡараштыра инек. Әсәйемдең ошондай һиҙемләүе булғандыр: өйҙә китап күп икән, был кеше тормошона рухи нигеҙ була. Беҙ шуға инанып үҫтек тә инде. Әсәйемдән: "Лилиә, ошо китаптарҙы уҡыһаң, аҡыллы кеше булып үҫерһең", - тип әйткәне күңелгә һеңгән. Ул

шөғән йылдарымды, алтын бала сағым, тип, һағынып иҫкә алам... Әсәйем ошо көндәрҙә ҡыҙымдың туй табынындағы телмәрендә лә быларҙы хәтергә төшөрөп алды һәм: "Беҙ олатайың менән өйләнешкәндә уның бер ҡара сумаҙанынан, минең сумкаларымдағы әйберҙәремдән башҡа бер нәмәбеҙ ҙә юҡ ине. Әммә матур итеп йәшәнек тә киттек, бергәләп тырышып, донъя көттөк, ике ҡыҙға ғүмер бирҙек. Донъя малы табыла ул, тик һәр икегеҙҙең тырышлығы, түҙемлеге, бер-берегеҙгә аңлауы кәрәк", - тине. Эйе, ғаилә ҡорған йәштәр өсөн алтын кәңәш инде былар.

Ә мин үҙем 1-се класҡа 6 йәшемдән барҙым. Былай булды ул хәл. Әсәйем: "Һин, Лилиә, буйға оҙон ғынаһың, балалар баҡсаһында 7 йәшлектәр һинән бәләкәйерәк, әйҙә, мәктәпкә уҡырға бар", - тине. Әммә башланғыс класс уҡытыусыһы мине, бәләкәй, тип, уҡырға алырға риза булмаған. Минең уҡырға барырға теләгем ҙур булғандыр, директор кабинетына барып ингәнмен дә: "Алмаз Сәлимович, һеҙ ни эшләп мине уҡырға алмайһығыҙ? Мин бит уҡый ҙа, һанай ҙа беләм, вис беләм!" - тип әйтәм икән. Шулай бик ныҡышҡас, уҡыһын әйҙә, тип рөхсәт биргән директорыбыҙ. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Алмаз Сәлим улы Исхаҡов 27 йыл буйына мәктәптә директор булды, хәҙер мәктәп уның исемен йөрөтә. Тәүге уҡытыусым Татьяна Васильевна мине, әле балалыҡтан сығып бөтмәгән ҡыҙыҡайҙы, ҡайҙа маҡтап, ҡайҙа хуплап, дәртләндереп, уҡытып алып киткән бит. Төплө белемле, бала күңеленә юл таба белгән, психологик яҡтан бик һиҙемле уҡытыусы булды шул ул.

Өйҙә башҡортса ла, русса ла һөйләштек. Һеңлем "А" класында уҡығас, уға башҡорт теле дәрестәре лә керҙе, ә миңә "Б" класында тик русса уҡырға тура килде. Шунан һуң, Белорет педучилищеһында уҡыған сағымда вокаль төркөмдә йырлай инем, Белорет ауылдарында концерт ҡуйып йөрөнөк, башҡорт йырҙарын башҡарырға тура килде. Шул саҡта бер башҡорт егете менән дуҫлашып киттек, ул армиянан миңә тик башҡорт телендә генә хаттар яҙҙы. Шулай итеп мин аҡрынлап башҡорт телендә уҡырға өйрәндем. Әлбиттә, туған телебеҙҙе бөтә нескәлектәрендә өйрәнеү насип

стан тыш алдылар ул саҡта. Эй иланым шунда, беҙҙең баштарға "программа" һалынған бит инде - мәктәпте тамамлағас, институтҡа инергә, шунан эшләй башларға, кейәүгә сығырға, бер йыл үткәс, бала табырға. Ә мин шул "программа"ға яраҡһыҙ булып сыҡтым. Шул саҡта атайымдың бер иптәше миңә ярсалап әйтә ҡуйҙы бит: "Айда поехали в Белорецк, там в педучилище поступишь", - ти. Барҙым, документтарҙы тапшырғас, шундай яҡшы билдәләр менән нисек вузға уҡырға алманылар ул, тип аптырайҙар. Шулай уҡып алып киттем педучилищела.

Ғөмүмән, педучилище бик күпте бирҙе. Бына, мәҫәлән, беҙгә педиатрия нигеҙҙәрен уҡыттылар. Бер йәшел тышлы ҡалын дәфтәргә лекцияларҙы яҙып барғанмын. Хәҙер шуларҙы уҡып ҡарайым да, иҫем китә: балалар ауырыуҙары буйынса нисек төплө мәғлүмәттәр биргәндәр беҙгә. Бер саҡ шулай бала менән Өфөлә дауаханала ятам, үҙемде насар тоя башланым. Температурам күтәрелде, телем ҡуныҡ менән ҡапланған. "Миндә аппендицит бит", тим табипҡа. Ул: "Ниндәй аппендицит булһын!" тип тыҙынып китте. Аҙна буйына эсем ауыртыуын баҫыр өсөн баралгин бирҙеләр. Бер көндә температурам 40 градусҡа етте. Күрәһең, һуҡыр эсәк шартлап, перитонит башланған. Алып киттеләр мине Өфөгә, Республика дауаханаһына. Был хәл төнөн булды. Миңә бер республикала танылған хирург операция эшләргә тейеш ине, әммә, әмәлгә ҡалғандай, дауаханаға бер нисә урындан бысаҡ менән сәнселгән ирҙе алып килделәр ҙә, теге хирург ул ирҙе ҡотҡарырға тейеш булып сыҡты. Ә миңә операцияны Павлов фамилиялы

*✓ Хакимиәт башлығы кешеләр менән һөйләшергә, аңлашырға мине сығара. Халыҡҡа эштең ниҙә икәнен аңлата алһаң, улар тыныслана. Ғөмүмән, хакимиәттә эшләгән йылдарымды етәкселек мәктәбе, тип атарға мөмкин.*



йәш кенә хирург эшләне (әлеге ваҡытта Павлов Валентин Николаевич - БДМУ ректоры, РФА академигы, медицина фәндәре докторы, профессор).

...Педучилищеға уҡырға кергән сағымда миңә 16 ғына йәш ине, ауыл балалары бит инде беҙ, ҡала таныш түгел. Ҡала буйлап йөрөгәндә аҙмы-күпме ҡурҡыу, хәүефләнеү тойғоларын кисерә инек. Училищены Ҡыҙыл дипломға тамамлағас, Өфөгә барып, Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға индем.

**▸ Һеҙ институтта психология фәнен өйрәнгәнһегеҙ, уның эшегеҙҙә, тормошоғоҙҙа файҙаһы тейҙеме?**

- Психологияға килгәндә, беҙ уны, башлыса, теоретик яҡтан өйрәндек. Ә ғәмәли, практик психология яңы ғына үҫешә башлаған ваҡыт ине. Институтты ла Ҡыҙыл дипломға тамамлап, Учалыға эшкә ҡайттым. Ә нихасил булмай. Әлбиттә, кешенең психологик үҙенсәлектәрен ғәмәли рәүештә беләһең икән, уға ҡарата дөрөҫ мөнәсәбәт булдырыу еңелерәк.

**▸ Тормош юлдашығыҙ менән нисек танышып киткәйнегеҙ?**

- Беҙ студент инек танышҡан сағыбыҙҙа. Ул Ауыл хужалығы институтының 5-се курсында уҡый ине, мин - Пединститутта. Танышып китеүебеҙ осраҡлы булды, тип әйтергә була. Поезда бер таныш ҡыҙ менән һөйләшеп китеп барабыҙ. Был егет шул ҡыҙ аша минең кем булыуым менән ҡыҙыҡһынған, исемемде һораған. Бер мәл ул ҡаршыма килеп ултырҙы ла: "Һаумы, Лилиә!" - ти. Мин аптырап киттем, һин мине ҡайҙан беләһең, тим. "Һин оноттоңмо ни, осрашып, һөйләшеп йөрөнөк тә баһа!" - ти был. Шулай һөйләшеп киттек. Әммә мин үҙемдең нисәнсе курста уҡығанымды ла, ҡайҙа йәшәгәнемде лә белдермәнем. Тик йолаларына ярашлы уҙғарҙылар, тәүҙә мине һоратып, яусылар ҙа килде. Шунан танышыуҙар, туй тураһында һөйләшеп килешеүҙәр булды. Әсәйем аҙаҡ, һине кейәүгә биргәндә 5 тапҡыр ҡунаҡ йыйырға тура килде, тине. Беҙҙең йола буйынса тәүҙә ҡыҙ яғында ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы 2-3 көн ҡунаҡ итәләр, ә унан кейәү йортонда туй дауам итә бит инде. Бына шулай йәшәп алып киттек.

**▸ Артабан һеҙҙең Учалыла урындағы хакимиәт эшенә, идара итеү даирәһенә күсеүегеҙҙе беләбеҙ. Шул хаҡта ла һөйләп үтегеҙ әле.**

- Мәктәптә 6 йылдан ашыу эшләнем. 2001 йылда Учалы ҡала хакимиәте мәғлүмәт-аналитика бүлеге хеҙмәткәре вазифаһына конкурс иғлан иткәйне. Таныштарымдан кемдер миңә: "Лилиә, бар һин шунда эшкә, белемең етерлек, кешеләр менән аралаша, аңлаша алаһың, бүлектәрҙән киләләр ҙә, тегене яҙып бирегеҙ, был хаҡта мәғлүмәт әҙерләгеҙ, тип тағы эш ҡушалар.

Артабан мине бүлек етәксеһе итеп ҡуйҙылар, ярҙамға бер йәш ҡыҙҙы эшкә алдылар. Тора-бара мәғлүмәт-аналитика бүлеге эшмәкәрлеген яйға һалдыҡ, системалы рәүештә эшләй башланыҡ. Халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә булып, уларҙың мохтажлыҡтарын иҫәпкә алырға, аңлатыу эштәре алып барырға өйрәндек.

Эшемә һәйбәт баһа биреп, хакимиәт башлығының ижтимағи эштәр буйынса урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнеләр. Минең ошо вазифалағы төп бурысым - халыҡ менән эшләү булды, уларҙың ихтыяждарын ҡайғыртыу, мәнфәғәттәрен яҡлау. Шуның өсөн эшлекле белгестәрҙән үҙемдең командамды булдырҙым. Ә ваҡыттар еңелдән түгел ине, 2000 йылдар башында төрлө реформалар бара, шул гән пункттарҙан торған программалар ҙа яҙып бирәләр, имеш. Ошо рәүешле генә халыҡ ышанысын яулап булмай бит инде.

Мин район хакимиәтендә эшләгән осорҙа күп нәмәгә өйрәндем, ул саҡтағы коллегаларыма рәхмәтлемен. Бына, мәҫәлән, ҡалала, районда махсус иҫәптә торған балалар байтаҡ булды. Күбеһенең аталары юҡ, әсәләре эскегә һалышҡан. Балиғ булмаған балалар эштәре буйынса комиссияға саҡыртып, штраф һалып ҡына бер ни эшләп булмай. Шундай ҡарарға килдек: төрлө органдарҙа хеҙмәт иткән офицерҙарҙың һәр береһенә ошондай бер үҫмерҙе беркеттек. Бағыусылар табып (айына 60 мең һум), уларҙы бассейнға бушлай йөрөтә башланыҡ. Бер йәй дауамында үҫмерҙәр араһында хоҡуҡ боҙоу осраҡтары 2 тапҡырға кәмене.

Йәнә бер осраҡ иҫтә ҡалған. Ауылдарҙа эскелек көслө ине.

# ТОРМОШ БАҪҠЫСТАРЫ,

## яуланған үрҙәр

сек итеп эшкә инеп китеүем үҙе бер ҡыҙыҡ тарих. Тегендә барам, бында барам - бер ҡайҙа ла эш юҡ. Бер балалар баҡсаһына нянечка кәрәк икән, тип ишетеп ҡалдым. Барҙым. Дипломдарымды ҡаранылар ҙа: "Иртәгә килегеҙ, бәлки, алырбыҙ", - тиҙәр. Шунан әсәйемә мине химиянан уҡытҡан Дамира Ваис ҡыҙы: "Лилиә тиҙ генә 10-сы мәктәпкә барһын, унда пионервожатый кәрәк", - тип шылтыратҡан. Минең эш таба алмайынса йөрөгәнемде белгәндер инде. Ә ул мәктәптә уның һеңлеһе Гөлшат Ваис ҡыҙы директор урынбаҫары булып эшләне ул саҡта. Унда миңә мәктәп психологы булып эшләргә тәҡдим иттеләр. Психолог вазифаһынан тыш, уҡыусыларҙың төрлө эштәрен ойоштороусы итеп ҡуйҙылар, егелеп эшләргә тура килде. Ул линейкалар, ул төрлө байрам сараларына әҙерләнеү, кластан тыш эштәр - тик өлгөр генә. Тормош иптәшем менән (ул милицияла эшләне) иртүк сәғәт 8-ҙән сығып китәбеҙ ҙә кисен 10-ға ғына ҡайтып керәбеҙ. Йәш белгескә былар ғына аҙ булыр, тигәндәй, иң артта ҡалған класты ла бирҙеләр, аҡрынлап юлға һалдым уҡыусыларымды. Бик ҙур мәктәп, 1100 бала уҡый, барыһына бер психолог. Эш тәжрибәһе бөтөнләй юҡ. Балаларға нисек һөҙөмтәле йоғонто яһарға, уҡытыу-тәрбиә эшендә уларҙың психологик үҙенсәлектәрен нисек итеп иҫәпкә алырға эш барышында өйрәнергә тура килде. Уҡыусылар менән эшләү өсөн методик инструментарий кәрәк бит инде, ә ул юҡҡа иҫәп. Ҡалала бер нисә мәктәп психологы булды, бер-беребеҙ менән кәңәшләшеп эшләнек.

Ғөмүмән, кеше тәбиғәте ҡатмарлы, уның шәхесе, тәртибе, ғәмәлдәре тик йәмғиәттән, башҡалар йоғонтоһонан ғына студеттарҙың 1-се ятағында йәшәүем тураһында ғына әйткәнмен. Шунан ул бер ай буйы Өфө студенттарының барса 1-се ятаҡтарын йөрөп сығып, мине килеп тапты. Дуҫлашып киттек шулай, киноларға йөрөйбөҙ, Өфөнөң үҙәк урамдарын ҡыҙырабыҙ. Кафеға инеп, туңдырма алһаҡ, киноға аҡса ҡалмай, әммә йәш саҡ бит, шул тиклем күңелле ине.

**▸ Һәр кемебеҙҙең үҙ ояһы бар, унда үҙебеҙсә генә булған ҡағиҙәләр хөкөм һөрә. Өйләнешкәс, үҙ ғаиләһе талаптарына ярашлы тәрбиәләнгән**

һөйләү телең дә бик һәйбәт", - тип кәңәш бирҙе. Мин ошо конкурста ҡатнашырға булдым. Ул саҡта Учалы ҡалаһы һәм районы хакимиәте башлығы булып Ринат Барый улы Абдуллин эшләй ине. "Ул бит бик ҡаты, уҫал кеше, барма һин унда", - тип шылтыратыусы, киҫәтеүселәр ҙә булды. Шулай ҙа мин ниәтемдән баш тартмаҫҡа булдым. Ринат Барый улы минән ҡайҙан икәнемде, ҡайҙа уҡығанымды һораша башланы. Психолог икәнемде, журналист булып эшләгәнемде әйттем. "Бында психолог, журналист булыу етмәй, ә иҡтисадты белеү, анализлай белеү мотлаҡ", - ти. "Мин өйрәнермен", - тип яуапланым. Шулай хакимиәттә эшләп алып киттем.

уҡ льготаларҙы монетизациялау иғлан ителгәс, халыҡ урамға сығып, үҙ талаптарын белдерә башланы. Хакимиәт башлығы кешеләр менән һөйләшергә, аңлашырға мине сығара. Халыҡҡа эштең ниҙә икәнен аңлата алһаң, улар тыныслана. Ғөмүмән, хакимиәттә эшләгән йылдарымды етәкселек мәктәбе, тип атарға мөмкин.

**▸ Ғәҙәттә, айырым бер сәйәсмәнгә халыҡ йә ышана, йә юҡ. Бының үҙ сәбәптәре барҙыр инде...**

- Иң элгәре кешеләр менән йышыраҡ аралашыу, уларҙы борсоған һорауҙарға иғтибарлы булып, уларҙы хәл итеү юлдары хаҡында бергәләп һөйләшеү фа-

***Буласаҡ етәксе, ул кем генә булмаһын, ҡайҙа ғына эшләмәһен - табипмы, педагогмы, ауыл хужалығы белгесеме йә иһә техника өлкәһендәме - иң элгәре үҙ һөнәренең оҫтаһы булырға, шул өлкәлә аҙмы-күпме тәжрибә тупларға тейеш. Уның үҙ һөнәренең иң аҫҡы баҫҡысынан башлап хеҙмәт юлы үтеүе фарыз. Етәксе кешегә үҙ өлкәһе эшмәкәрлеген горизонталь тарафта ла, вертикаль буйынса ла ныҡлап, төплө аңлай алыу бик кәрәк. Шул саҡта ғына ул уңышлы етәксе булып өлгөрә ала. Әлбиттә, үҙ-үҙеңә талапсан булғанда ғына башҡаларҙан талап итеп була. Ҡырыҫлыҡ, тупаҫлыҡ етәксене биҙәмәй. Кешенең психологияһын белеп эш итергә кәрәк - ҡайһы саҡта ҡаты әйтергә лә тура килә, әммә талапсан, ғәҙел булаһың икән - кеше һине аңлай.***

**ике кеше араһында, бер-береһенә өйрәнгәнсе, ҡыйынлыҡтар ҙа була. Һеҙҙең яңы ғына ҡорған ғаиләгеҙҙә ошондай ауырлыҡтар булманымы?**

- Тормош юлдашым Рәхимйән Мәҫкәү ауылында күп балалы ғаиләлә тыуып үҫкән, 4 һеңлеһе бар, ул - иң өлкәне. Ғүмәровтар Учалыла күптәр, билдәле кешеләр. Ҡәйнәм ғүмере буйы һауынсы булып эшләгән ауыл ҡатыны, ҡайным - идараһы вазифаһында. Улар беҙгә ҡарағанда хәллерәк йәшәгәндәрҙер, машиналары ла булды. Мине ҡуш ҡуллап ҡабул иттеләр. Туйыбыҙҙы боронғо башҡорт

**▸ Педагогика өлкәһенән хакимиәт эшенә күскәндә ниндәйҙер шик-шөбһәләр, эштәрҙе нисек итеп юлға һалыу менән бәйле хәүефләнеүҙәр кисерҙегеҙме?**

- Әллә ниндәй уйҙарға бирелеп ултырырға ваҡыт булманы ул. Бар ниәт - эшләргә. Беҙҙең бүлектә ни бары 2 кеше эшләне. Ә бурыстар ҙур: төрлө материалдарға анализ эшләргә, хакимиәт башлығына төрлө саралар буйынса текстар әҙерләргә, һәр бер ауылда ойошторолған мәғлүмәт-аналитика төркөмдәренең эшен әүҙемләштерергә кәрәк булды. Өҫтәүенә, башҡа

рыз. Бына ауыл проблемаларын алайыҡ. Ауылдарға йөрөп, клубтарҙа сходтар үткәреп, кешеләрҙең ни һөйләгәндәрен тыңлап, аңлашып эшләгәнгә ни етә. Уларҙың проблемаларын ауыл советынан алып Федерация Советына тиклем күтәреү мөмкинлеге бар бит. Коллегаларым менән аралашҡанда ҡайһы бер сәйәсмәндәрҙең һайлауҙар алдынан политтехнологтарҙы яллауҙары, уларға миллион һумлап аҡса түләүҙәре хаҡында ишеткәнем бар. Быныһы ғына ярай әле, шул уҡ политтехнологтар урындағы хәлдәр хаҡында бер ни белмәйенсә, тиҫтәлә-

Иң насары - ирҙәре вахтала йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар эсә. Ни эшләргә? Комиссия төҙөп, ауылдарға сыға башланыҡ. Хәтеремдә, бер ауылда комиссия ултырышына 10-лап эскесе ҡатын саҡырылғайны. Уларҙы өгөт-нәсихәт менән ҡотҡарып булырлыҡ түгел. Мин уларға: "Йә дауаланаһығыҙ, йә суд аша әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителәсәкһегеҙ", - тигән талап ҡуйҙым. Уларға, Американан алдырылған код ампулаларыбыҙ бар (буш, йәғни дарыуһыҙ ампула (плацебо), тип, шул юл менән дауаланыуға ризалашырға тәҡдим иттек. Ризабыҙ, тип расписка ла яҙҙырып алдыҡ. Уларҙың балаларын ҡурсалау хаҡына эшләнек быны. Һуңынан ошо ҡатындарҙың һигеҙе эсеүен ташланы тип хәбәр иттеләр.

Йәки балаларҙың йәйге каникулдарын ғына алайыҡ. Ауыл балалары бар, ҡалаларҙан ауылға ял итергә килеүселәре лә байтаҡ була. Әлбиттә, балалар өсөн лагерҙар бар, әммә был ғына етмәй. Беҙ йәйге миҙгелдә күпме бала бар икәне тураһында һәр бер ауыл буйынса мәғлүмәт ала инек. Улар өсөн дискотекалар, төрлө кисәләр, мәҙәни саралар, спорт уйындары ойоштороуҙы контролдә тота инек. Ҡала мәктәптәрендә лә шул саҡта йәйге лагерҙар ойошторола башланы, өҫтәлмә белем биреү, балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүсе үҙәктәрҙең эше әүҙемләштерелде. Әйтергә кәрәк, балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға иғтибар артҡас,улар араһында хоҡуҡ боҙоу осраҡтары, йә иһә фажиғәле хәлдәр бермә-бер кәмене. Хәҙер беҙ Федерация Советы кимәлендә лә ошо мәсьәләгә етди иғтибар бирәбеҙ, мәҫәлән, еңел конструкцияларҙан тиҙ төҙөлә торған йәйге лагерҙар күпләп асыласаҡ яҡын йылдарҙа.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

# ЛИЛИӘ ҒҮМӘРОВАНЫҢ ТОРМОШ БАҪҠЫСТАРЫ,

## йәки Хеҙмәттә яуланған үрҙәр

(Башы 8-9-сы биттә).

**Башҡортостан Хөкүмәте аппаратына нисек итеп эшкә килеүегеҙ хаҡында ла һөйләп үтегеҙ әле...**

- Ул былай булды. 2001 йылда Учалыға Өфөнән ҙур ғына Хөкүмәт делегацияһы килгәйне. Учалы ҡалаһында һәм районында алып барылған эштәр менән танышып, беҙҙең эшмәкәрлегебеҙгә яҡшы баһа бирҙеләр. Аҙаҡтан минә: "Һине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутатлыҡҡа кандидат итеп тәҡдим итербеҙ, тиҙ генә документтарыңды килтер",- тинеләр. Мин риза булдым. Күп тә үтмәне, Рафаэль Ибраһим улы Байдәүләтов хакимиәт башлығына шылтыратып, мине телефонға саҡырырға ҡушҡан. "Давай, Лилиә, Хөкүмәткә эшкә кил, беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙан етәксе кадрҙар етешмәй", - ти ул миңә. Мин уға: "Депутатлыҡҡа документтарымды биргәйнем бит әле", - тим. "Унда икенсе кандидаттар ҙа етерлек, әлегә бында эшләрһең", - тигәс, аптырабыраҡ ҡалдым. "Касан киләйем?" - тип һорайым. "Дүшәмбенән эшкә сығаһың", - ти Премьер-министр. Шулай итеп, Өфөлә Хөкүмәт аппаратында эшләй башланым.

Өфөгә башта үҙем генә, бер сумаҙан әйбер менән килдем. Йәшәргә урын юҡ, ирем менән ҡыҙым Учалыла. Учалыға кире ҡайтҡым килеп илап та алам. Бер аҙҙан ғаиләм ҙә Өфөгә күсеп, ирем милицияға эшкә урынлашты, ҡыҙым 158-се Башҡорт гимназияһында уҡый башланы. Тәүге мәлдәрҙә ҡыйынраҡ булды. Һунынан, бер өс йылдан, Балалар хоҡуҡтары буйынса уполномоченный вазифаһына тәғәйенләндем. Был вазифала бер йыл тирәһе эшләгәс, минең кандидатурамды БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға депутатлыҡҡа тәҡдим иттеләр. Стәрлетамаҡ округынан һайланырға тейеш инем. Хакимиәт башлығы Спартак Ғәли улы: "Һин бынан үтә алмаҫһың, беҙҙекеләр башҡа ерҙән килгәндәргә тауыш биреп бармай", - тип иҫкәртһә лә, халыҡ менән осрашыуҙарға мөмкин тиклем күберәк йөрөп, күпселек тауыш менән үтеп киттем.

**Лилиә Салауат ҡыҙы, етәксе булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк, гөмүмән, етәксе карьераһын нисек ҡуҙаллап була?**

- Шуны күҙәткәнем бар: мәҫәләнән, ҡайһы берәүҙәр депутат ярҙамсыһы булып йөрөй-йөрөй ҙә, үҙе лә депутатлыҡҡа дәғүә итә башлай. Буласаҡ етәксе, ул кем генә булмаһын, ҡайҙа ғына эшләмәһен - табипмы, педагогмы, ауыл хужалығы белгесеме йә иһә техника өлкәһендәме - иң элгәре үҙ һөнәренең осҡаһы булырға, шул өлкәлә аҙмы-күпме тәжрибә туплаҡға тейеш. Уның үҙ һөнәренең иң аҫҡы баҫҡысынан башлап хеҙмәт юлы үтеүе фарыз. Етәксе кешегә үҙ өлкәһе эшмәкәрлеген горизонталь тарафта ла, вертикаль буйынса ла ныҡлап, төплө аңлай алыу бик кәрәк. Шул саҡта ғына ул уңышлы етәксе булып өлгөрә ала. Әлбиттә, үҙ-үҙеңә талапсан булғанда ғына башкаларҙан талап итеп була. Ҡырыҫлыҡ, тупаҫлыҡ етәксене биҙәмәй. Кешенең психологияһын белеп эш итергә кәрәк - ҡайһы саҡта ҡаты әйтергә лә тура килә, әммә талапсан, ғәҙел булаһың икән - кеше һине аңлай.

**Һеҙҙең өсөн өлгө булған етәксе-остаздарҙан кемдәрҙе атап китер инегеҙ?**

- Мин иң тәүҙә мәктәптә белем-тәрбиә биргән уҡытыусыларыма рәхмәтлемен - улар беҙгә шәхес итеп ҡаранылар, маҡсаттар ҡуйып, уңышҡа өлгәшергә өйрәттеләр, йәмғиәткә файҙалы эштәргә йәлеп иттеләр. Буласаҡ етәксе сифаттары мәктәптә үк тәрбиәләнә башлана. Мине пионер ойошмаһында отряд советы, дружина советы рәйесе итеп ҡуйҙылар, вожатыйҙар етәкселегендә төрлө саралар ойошторорға өйрәндек. Класс етәксебеҙ, инглиз теле уҡытыусыһы Лариса Борисовна бик тә кешелекле булды, һәр ҡайһыбыҙҙың күңеленә юл таба белде. Мәктәптә эшләгән ваҡытта Гөлшат Ваис ҡыҙы күп нәмәгә өйрәтте. Хакимиәт етәксеһе Р.Б. Абдуллиндан үҙенең ҡул аҫтындағыларҙан дисциплиналы булыуҙы мотлаҡ талап итергә өйрәндем. Үҙебеҙҙең республика етәкселәренән М.Ғ. Рәхимов, Р.И. Байдәүләтов беҙгә өлгө булды.

Федерация Советында мин иң ныҡ хөрмәт иткән шәхес - Валентина Ивановна Матвиенко. Мәскәүгә эшкә килеү менән ул миңә: "Ярай, бында эшкә күскәс, бик яҡшы. Республикала ғына түгел, федераль етәкселек кимәлендә лә эшләргә өйрәнергә кәрәк", - тип әйтте. Бик итәғәтле, эшлекле һәм талапсан етәксе ул. Ул төбәктәрҙәге хәлдәргә бик иғтибарлы, республикаларға ҡарашы ыңғай. Иң мөһиме - ул Рәсәй субъекттарындағы мәктәптәрҙе, балалар дауаханаларын, мәҙәни объекттарҙы төҙөкләндереү өсөн федераль бюджеттан өҫтәлмә финанс бүлеһен тип, ысынлап тороп көрәшә, шул уҡ йәйге лагерҙарҙы ҡайтанан төҙөү уның инициативаһы менән гәмәлгә ашырыла. Валентина Ивановна ветерандар, зәғиф балалар тураһында даими ҡайғырта, орфан сирҙәре менән яфаланған балаларға дарыуҙарҙы үҙаҡлаштерелгән рәүештә һатып алыуҙы талап итә.

**2014 йылда БР Хөкүмәте Һеҙҙе Рәсәй Федераль Йыйылышының Федерация Советына сенатор вазифаһына тәҡдим итте. Мәскәүгә эшкә барғас, ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар кисерелдеме?**

- Булды, әлбиттә. Федераль кимәлдәге яңы вазифа, яуаплылыҡ та бик ҙур. Ғаиләм дә Өфөлә ҡалды. Үҙебеҙҙә өйрәнелгәйне -көслө командам бар, бурыстарымды тейүәл үтәй инем. Унан һуң, Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитетына рәйес урынбаҫары итеп тәғәйенләндем. Тырышһаң - өйрәнәһең, аҡрынлап эш айышына төшөнөп, эшләп алып киттем. Ә 2019 йылда мине ошо комитеттың рәйесе итеп һайланылар. Закондар сығарыу эшмәкәрлеге лә ҡатмарлы бит, бында иң элек юрист булыу зарур. Комитет төбәк брендтарын өйрәнеп, юридик яҡтан "Роспатент"та теркәп ҡуйыу менән дә шөғөлләнә. Төбәк брендтары интеллектуаль мөлкәт өлкәһенә ҡарай, ул юридик яҡтан яҡлаулы булырға тейеш. Аллаға шөкөр, Башҡортостаныбыҙҙың "Башҡорт аты", "Башҡорт балы", "Башҡорт ҡурайы", "Бөрйән солоҡ балы", "Ассы", "Ҡорғаҙаҡ", "Йоматау" минераль һыуҙары, "Мансур граниты" брендтары рәсми рәүештә теркәлеү үтте.

**Рәсәйҙә йыл һайын яңынан-яңы закондар ҡабул ителеп тора. Уларҙы халыҡҡа еткереү, аңлатыу зарурлығы бар. Һеҙ, Лилиә Салауат ҡыҙы, интернет селтәрҙәрендә үҙегеҙҙең профиль буйынса ҡабул ителгән һәм ҡарауға сығарылған закондар хаҡында даими мәғлүмәт биреп тораһығыҙ, һәм улар һәр кемгә аңлайышлы тел менән тәфсир ителә...**

- Эйе, закондарҙы һәйбәт итеп аңлата ла белергә кәрәк, был үҙе бер маһирлыҡ талап итә. Закондарҙы ҡабул итер алдынан да, һуңынан да күп нәмәне өйрәнергә тура килә. Бер кеше лә бер юлы барыһын да белә алмай. Миңә һис оят түгел - ниҙелер төшөнөргә теләйем икән, 1-се категориялы юрист менән дә, ябай педагог менән дә һөйләшеп, уларҙың кәңәштәрен тыңлайым.

Барыһын да юғарынан көтөп ултырып булмай, үҙебеҙгә әүҙемлек күрһәтеү зарур. Бына комитетыбыҙҙың үтә бер мөһим эше хаҡында әйтеп үтәйем. Мәктәптәрҙә олимпиада хәрәкәте бар, һәм 2022/23 уҡыу йылында беҙҙең инициатива буйынса РФ Фән һәм юғары белем биреү министрлығы "Туған телдәр" профиле буйынса олимпиаданы ошондай олимпиадаларҙың федераль исемлегенә индерҙе. Уҙған уҡыу йылында федераль университеттар ҡатнашлығында Рәсәй халыҡтарының 30 туған теле буйынса уҙғарылған олимпиадаларҙа Рәсәйҙең 47 субъектынан 8 меңдән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Филология һәм педагогик йүнәлештәр буйынса вузға ҡабул иткәндә ошо олимпиадаларҙа енеүселәргә льготалар ҡаралған. Был мәсьәләне беҙ сенатор Римма Федоровна Галушина менән бик ентекле нигеҙләп, федераль кимәлдә хуплауға һәм байтаҡ ҡына университеттарҙы ойоштороу эштәренә йәлеп итә алдыҡ.

Шулай уҡ илебеҙҙең иң төньяҡ тарафтарында йәшәүсе аҙ һанлы, хужалыҡтары күсеп йөрөү менән бәйле халыҡтарҙың балаларын уҡытыуҙы көйләү буйынса "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы законға үҙгәрештәр ҡабул ителде (был мәсьәлә 15 йыл буйына хәл ителмәгән ине). Беҙ Ямал-Ненец округына барып, махсус ултырыш та уҙғарҙыҡ, унан күсмә белем биреүҙәге ҡыйынлыҡтар хаҡында материалдар алып ҡайттыҡ.

Ошо йәһәттән тағы ла бер идея бар беҙҙең. Башланғыс кластарҙа уҡыусы балалар үҙ ауылдарында уҡырға тейеш, сөнки кесе йәштәге балаларҙы көн һайын автобус менән йөрөтөп уҡытыуҙы, һәр яҡтан ҡарағанда ла, иң һәйбәт ысул тип баһалап булмай. Бәләкәйҙәр үҙ өйөнән йыраҡта уҡымаһын ине, быны өсөн мөмкинлектәр табып була.

Йәнә бер закон хаҡында, ул "Рәсәй Федерацияһының матди булмаған этномәҙәни ҡаҙаныштары тураһында" тип атала. Был закон да 11 йыл буйына ҡабул ителмәне. Беҙҙең тырышлыҡ менән уны ла ҡабул итеп, ғәмәлгә индерҙек. Бында бит беҙгә үтә ҡәҙерле булған йолалар, традициялар, халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады ынйылары һ.б. шундай ҡиммәттәр күҙ уңында тотола. Уларҙы хәҙер закон нигеҙендә һаҡлау, тергеҙеү мөмкинлектәре асылды, ә ошондай объекттарҙы барлап, өйрәнеп, федераль реестрға индереп була.

**Федерация Советындағы коллегаларығыҙҙың Һеҙгә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булыуы хаҡында ни әйтер инегеҙ?**

- Беҙҙең мөнәсәбәттәр иң элгәре эш менән бәйле ул. Барыһы менән дә килешеп эшләйбеҙ, бер-беребеҙгә ярҙам итеп, терәк булып торабыҙ. Комитетта 15 сенатор, тыныс эш атмосфераһы урынлашҡан.

**Заман башҡортон нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Әлбиттә, заманса белемле, һөнәрле, туған телен һәйбәт белгән, халҡының йолаларын, традицияларын хөрмәт иткән, тарихын өйрәнгән, әхлаҡлы һәм эшмәкәр шәхес булырға тейеш хәҙерге заман башҡорто. Ундай шәхестәребеҙ бар, уларҙы йәштәребеҙгә өлгө итеп ҡуйырға була. Республикабыҙ өсөн көс һалған сәйәсмәндәр, ауыл хужалығы, сәнәғәт өлкәһе белгестәре, сәнғәт әһелдәре, уҡытыусылар, табиптар - күп улар. Шулай ҙа был исемлеккә төүгеләрҙән мин Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировты индерер инем. Бөгөн Башҡортостан Рәсәй Федерацияһының терәк төбәге булып тора. Республикала сәнәғәт, фәнни-технологик үҫеш, мәҙәниәт һәм сәнғәт, ғаиләне һәм балалыҡты яҡлау өлкәһендә бик күп күләмле проекттар тормошҡа ашырыла. Һәм был күбеһенсә Радий Фәрит улының талантлы етәкселеге, ҡыйыулығы һәм тәүәккәлеге арҡаһында тормошҡа ашырыла.

Бына былтыр "РФА-ның М.П. Чумаков исемендәге Федераль ғилми тикшеренеүҙәр һәм иммунобиологик препараттар уйлап табыу үҙәге"нең генераль директоры, РФА академигы Айҙар Айрат улы Ишмөхәмәтов коронавирусҡа ҡаршы вакцина уйлап табыуҙағы ҡаҙаныштары өсөн Пирогов орденына лайыҡ булды. Беҙҙең Башҡортостандан сыҡҡан шәхес бит ул. Башҡа бик күп күренекле шәхестәребеҙҙе, заман башҡорто, тип әйтә алыр инем.

**Ғәҙәттә, етәксе вазифаһын биләгәндәрҙе йыш ҡына бер нигеҙһеҙ тәнҡит итәләр, төрлөсә яла ягалар. Нисек түҙәһегеҙ шундай хәлдәргә?**

- Тәүҙә ауыр кисерә инем. Бер мәл В.И. Матвиенко миңә әйтә: "Һәр бер ҡара нәмәне ауырға алһаң, һин яҡшыға өмөт итмә. Өләсәйем әйтә торғайны, "На каждый роток не накинешь платок", тип. Тыныслан". Хәҙер иғтибар итмәйем ундай нәмәләргә. Кешеләргә, халҡыбыҙға, республикабыҙға ярҙам итеү мөмкинлеге бар икән - булған проблемаларҙы хәл итергә тырышам. Хоҙайға рәхмәтлемен, барыбыҙға ла иҫәнлек-һаулыҡ, балаларыбыҙға тәүфиҡ бирһен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостандың иң билдәле ҡатын-ҡыҙ сәйәсмәндәренең береһе, мәктәп психологы вазифаһынан РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы дәрәжәһенә, уның комитеты рәйесе кимәленә тиклем күтәрелгән Лилиә Салауат ҡыҙы Ғүмәрова үҙенең тормош юлы һәм күп яҡлы эшмәкәрлеге хаҡында тукмәй-сәсмәй бәйән итте әңгәмәбеҙҙә. Йәнә шуны ла билдәләү мөһим: закондар сығарыуҙа әүҙем ҡатнашып, беҙҙең сенаторыбыҙ һуңғы ике сессия барышында ҡабул ителгән 9 федераль закон проекты һәм ҡарауға сығарылған 6 закон проектының инициаторҙары төркөмө составына ингән. Беҙ Лилиә Салауат ҡыҙына яңы уңыштар, яңы ҡаҙаныштар теләйбеҙ.**

*Гөлфиә ЯНБАЕВА*
*һәм Бәҙри ӘХМӘТОВ*
*әңгәмә ҡорҙо.*

***✓ Ғилмишәрифтең итек ҡуңысы йылы ҡан менән тулды. Теҙгендең, ауыҙлыҡтың бушағанын һиҙеп, Әүхәҙи йөрөшөн әкренәйтте лә ергә шылып төшкән хужаһының башы осона туҡтаны. Ат ерҙә ятҡан хужаһын мороно менән төрткөләне.***





# АТЛЫ БАШҠОРТ

Рамаҙан ӨМӨТБАЕВ

Повесть

Әмәлгә ярағандай, ноябрь баштарына һыуытып ебәрҙе, кисәге ҡуйы һорғолт батҡаҡ боҙға әйләнде. Уның ҡарауы, инде йоҡа ғына кейемле кавалеристар эйәр өҫтөндә шыҡырайып ҡатты, хәрәкәт туҡтаған урындарҙа юлда тирләп килгән аттар өшөүҙән ҡалтыранды. Ярай әле, бөтә частарҙа ла ер аҫтынан булһа ла табыусы, йүнсел, йоҡоһоҙ хужалыҡ кешеләре бар. Улар эскадрондарға һырма салбар, ҡыҫҡа тиртун, йылы эске кейем таратып бирҙе. Һәр кавалерист һуғыш алдынан тәғәйен ике боекомплект алды. Тик биш көнлөк аҙыҡ-түлек, фураж ғына, транспорт етешмәү сәбәпле, эскадрондарға килтереп еткерелмәне.

Фронтҡа яҡынайған һайын бесән наҡыҫланды, туҡтаған урында кавалеристар ҡулдарына көрәк тотоп, унда-бында өлтәйеп ултырған тамырҙарҙы, туңған үләндәрҙе ҡаҙып килтереп аттары алдына һалды. Ғүмер баҡый бүтәгәле йәшел ҡылғанға, ә көҙөн өҙләкһеҙ ямғырҙарҙа күтәрелеп ҡалған ҡурпыға күнеккән Әүхәҙи баштараҡ Ғилмишәриф алып ҡайтҡан ҡамышлы үләнде мороно менән генә этеп ҡуйһа, ә хәҙер бысраҡ тамырҙары менән дә ашап ҡуя.

Эскадрон тимерселәре бөтә аттарҙың да дағаларын өр-яңынан тикшереп, ашалған, һынғандарын алмаштырып сыҡты. Һәр кем үҙен дә, атын да һөжүмгә әҙерләне. Атлылар аттарын, эйәр аҫтындағы ҡаптал, үндектәрен, үҙ ҡорамалын тикшерҙе, майланы, туҙандан таҙартты. Ҡыҙылармеецтар үҙҙәре лә палатка ҡороп, бушаған тимер мискәнән мейес эшләп, мунса ойоштороп ебәрҙе. Эскадрондар һөжүм итеү урынына, яҙғы ташҡын йырып аҡҡан тәрән генә үҙәккә, тупланды.

- Иртәгә таң менән көслө артиллерия әҙерлеге башланасаҡ. Шунан һуң беҙҙән алда фронт тотҡан уҡсы частар, дошмандың алғы һыҙығын өҙөп, танкылар өсөн юл әҙерләйәсәк. Танкылар артынан дөйөм команда менән шул йырындан дошман өҫтөнә ташланасаҡбыҙ, - тип кистән командирҙар аңлатып сыҡты. Был 19 ноябргә ҡараған төн ине. Ошо команданы көткән шикелле, Әүхәҙи ҙә төндө бик тыныслыҙ үткәрҙе. Ятып та ҡараны, һуңғы төндә үҙ эргәһендәге бер соҡор төбөнә ултырып төнәп алырға маташҡан Ғилмишәрифте мороно менән төртөп уятты ла уға оҙаҡ ҡына моңайып ҡарап торҙо. Ғилмишәриф өшөгән ҡулдарын уның ялы төбөнә тығып йылытты, муйынынан һыйпаны.

Таң һарыһы беленгәс тә, артиллериянан атыу башланды: бөтә донъя ҡупты, ер ҡалтыранды. Сәғәттән ашыу барған атыш ҡапыл ғына туҡтап ҡалды. Ракета һауаға сөйөлөү менән таңды яңғыратып йәйәүлеләрҙең "Ура!" һөрәне яңғыраны. Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, геүләгән танкылар тауышы ишетелде. "Былар инде йәйәүле ғәскәр дошман һыҙығын йырған араға ынтылды", - тип самаланы Ғилмишәриф. Эскадрон командирының "По коням!" - тигән һөрән һалыуын көтөп алыуы Ғилмишәрифкә мәңгелек булып тойолдо. Бына, ниһайәт, ҡөҙрәтле команда яңғыраны. Ғүмерендә лә Хоҙайға ышанмаған Ғилмишәрифтең ауыҙынан: "Йә, Хоҙай, хәйерле сәғәттә", - тигән һүҙ ысҡынды.

Эскадрон һөҙәк ярға күтәрелде лә бер нисә секунд туҡтап ҡалды. Янған танкыларын, емерелгән автомашиналарын, тәгәрмәстәре менән өҫкә ауған мотоциклдарын, ҡыйратылған пушка-минометтарын ҡалдырып, дошман фронт буйлап сигенә. Уларҙы борсаҡ һымаҡ һибелгән беҙҙең пехота ҡыҫырыҡлай. Бына һөжүм итеүсе танкылар колоннаһы барып инде лә, ҡасып барған дошманды тапап, иҙеп үтә башланы.

Эскадронда фарман яңғыраны: "Шашки к бою! Галопом за мной в атаку, ма-а-рш!" Теҙелеп торған йөҙәрләгән һыбайлы хәрәкәткә килде. Кавалеристар теҙгендәрен ат ихтыярына биреп, шенкелдәрен ҡыҫты, турайған кәүҙәләрен алға иңкәйтте. Зыңлап тартылған ян керешенән осҡан ҡауырһынлы уҡ кеүек, атлылар алға, ҡасҡан дошман өҫтөнә ябырылды. Алда осраған ваҡ-төйәк соҡорҙар, емерелеп ятҡан тимер сыбыҡ кәртәләр аша һикереп, Әүхәҙи ҙә үҙ ауылдашын алға, дошман өҫтөнә алып сапты. Туң ерҙә сыр-сыу килеп, кешнәшеп сапҡан йөҙәрләгән аттарҙың тояҡ тауышы, ҡылыстарын уңлы-һуллы болғап алға ынтылған кавалеристарҙың берҙәм, көслө "Ура!" һөрәне ҡасып барған дошман йөрәгенә ҡурҡыныс һалды. Артына әйләнеп ҡарай-ҡарай ҡасып барған фашист пулянан, мина һәм снаряд ярсығынан үлергә риза, ләкин үткер ҡылыстан башы ҡыйылып, ергә тәгәрәүенән ҡото оса. Был имәнес үлем уларҙың теләһә ниндәй батырын да тетрәтә. Шуның өсөн дә улар бик берҙәм ҡаса. Ҡайһы берәүҙәре башын ҡылыстан һаҡлау өсөн винтовкаларын, автоматтарын баш осона арҡыры ҡуйған.

Әүхәҙи бөтә эскадрондың алдына килеп сыҡты. Бына Ғилмишәрифтең ҡылысынан ялтанған фашист аттың һул яғына сыҡты ла, төрлө яҡҡа тайпылатайпыла юрғалап, йүгереп ҡотолорға уйланы. Ә Ғилмишәриф уны сабыу урынына ҡылысының осо менән үңәсенән сәнсеп үтте. Фашист бер аҙ сайҡалып торҙо ла, бысылған ағас һымаҡ, ергә ауҙы. Әүхәҙи Ғилмишәрифте икенсе немец яғына алып сапты - ат та эште төшөндө, күрәһең. Шул саҡ эскадрон командирының бик етди командаһы яңғыраны:

- Дошман кавалерияһы флангынан атакалай!

Дошманды эҙәрләп алға ынтылған кавалеристар сафына засадала ултырған румын кавалерия часы килтереп бәрҙе. Хәҙер эскадрон аттарын һулға, бейек йәйпәк һыртлы, гел генә ерән аттарға атланып, көтмәгәндә һөжүм башлаған румын атлыларына ҡаршы китте. Муйынын һуҙып йәнфарман сапҡан Әүхәҙи ауыҙын асып иң алда сабып килгән дошман айғырына ташланды. Тештәре менән өҫтөндә румын офицеры ултырған айғырҙың муйынынан эләктереп алды ла үҙенән байтаҡ ауырыраҡ та, бейегерәк тә булған атты ергә ауҙарҙы. Йығылып төшкән румын офицерының пуляһы Ғилмишәрифтең һул аяғын яндырып үтте, әммә был һелтәп өлгөрҙө - румындың башы ла ергә тәгәрәне.

Ғилмишәрифтең итек ҡуңысы йылы ҡан менән тулды. Теҙгендең, ауыҙлыҡтың бушағанын һиҙеп, Әүхәҙи йөрөшөн әкренәйтте лә ергә шылып төшкән хужаһының башы осона туҡтаны. Бер ни ҙә аңламаған ат ерҙә ятҡан хужаһын мороно менән төрткөләне.

Ғилмишәриф сорлап аҡҡан ҡанын индивидуаль пакетындағы жгут менән бәйләп туҡтатты, яралы аяғын өҫкә күтәреп, ергә салҡан ятты. Күп тә үтмәй, санэскадрон кешеләре уны арбаға һалып, ялан госпиталенә оҙатты. Әүхәҙи повозка артынан үҙен ҡамап торорға маташҡан кешеләрҙән ҡасып урманға инеп юғалды. Ғилмишәрифтең иптәштәре яҡын-тирәләге урманлыҡ, соҡор үҙәктәрҙе байҡап сыҡтылар ҙа, төңөлөп, эскадронға кире ҡайттылар.

Әүхәҙи бер нисә көн урмандан хужаһын эҙләп йөрөгәндән һуң үҙҙәренең эскадронына килеп сыҡты. Хужаһынан башҡа бер кемгә лә баш бирмәйәсәген белгән кешеләр айғырҙы хужалыҡ взводына килтереп тапшырҙылар. Ул туҡмалһа туҡмалды, бында ла арҡаһына бер кемде лә атландырманы. Тик бер генә кеше, иллене ҡыуып барған, элекке колхоз конюхы Безбородов ҡына тел аҫҡысы таба алды арғымаҡҡа. Тик ул ғына муйынына ҡамыт һалды, уны егеп эскадронға боеприпас, аҙыҡ-түлек ташырға керешә. Шулай бер-береһенә өйрәнеп кенә барғанда, Әүхәҙиҙең янбашына снаряд ярсығы тейеп, тегене ветлазаретҡа оҙаттылар.

Һуғышта ҡаты яраланып ветлазаретҡа эләккән аттарҙы мөмкинлек булғанда халыҡ хужалығына тапшырыу тәртибе бар, инде бөтөнләй өмөтһөҙ булһа, "расход"ҡа ебәрәләр ҙә итен кухняға тапшыралар. Атлы ғәскәрҙә "йылҡы ите харам" тип йөҙөн сирып, танауын ситкә борған кеше юҡ, кавалеристарҙың барыһы ла ат итенең ҡәҙерен яҡшы белә. Иллә бер генә кавалерист та аҫтан үлһә үлә, үҙе атланып йөрөгән атының итенә тотонмай.

## XII

Ғилмишәрифтең яраһы ауыр ғына булып сыҡты. Медсанэскадронда тәүге ярҙам күрһәттеләр ҙә тылға оҙаттылар. Башта һул аяғының тубыҡтан өҫ яғына гипс һалдылар. Бер нисә аҙна үтеүгә, гипс аҫты тәҡәт бирмәй ҡысыта башлағас, йоҡоһоҙлоҡтан һәм ҡысыныуҙан үлер сиккә еткән Ғилмишәриф ҡултыҡ таяғының осо менән гипсты төйгөләргә керешә. Военврач асыуланып алды ла, гипсты аҡтарып, мыжғып торған бөжәктәрҙән таҙартты. Яңынан гипс һалдылар. Ошонан һуң ғына әҙәм рәтле ашай, йоҡлай башланы Ғилмишәриф. Ләкин йоҡоһо бик самалы ғына булды. Егермеләп кеше ятҡан, стеналарына камфара, тағы әллә ниндәй дарыу һәм серегән еҫ тә һеңеп бөткән госпиталь бүлмәһендә тыныс йоҡо буламы? Кешеләрҙең һыҙланып ыңғырашыуы, төштәрендә һуғыш мөғжизәләрен күреп ҡысҡырып уяныуҙары бер кемгә лә вайымһыҙ йоҡлап ятырға ирек бирмәй.

Әүхәҙи хәтәр яҙмыштың икеһенән дә имен-аман ҡотолдо. Быға, беренсенән, һәр кеше һоҡланырлыҡ буйы-ҡиәфәте ярҙам итте, "расходҡа" ебәрергә командирҙың да ҡулы барманы. Икенсенән, Сталинград янындағы һуғыштарҙан һуң, уларҙың атлы часы май айына тиклем оборонала торҙо. Әүхәҙиҙе ветлазаретҡа ҡуйып дауаларға һәм аҙағына тиклем һауыҡтырырға булдылар. Янбаш һөйәге ныҡ ҡына онталған булыуына ҡарамаҫтан, ҡорһаҡ аҫтынан аҫылынған көйө дауаланылар. Икенсе ай тигәндә ат, әкренләп һылтыҡлай-һылтыҡлай, үҙенең бер нисә сантиметрға ҡыҫҡарып ҡалған аяғына баҫты. Яҙ ҡояшының үткер нурҙары һарай тәҙрәһендә уйнай башлағас, Әүхәҙиҙең йөрәге тыныслығын юғалтты. Ул тышҡа, иреккә ашҡынды, майҙансыҡта кордаға бәйләп йөрөтөлгән үҙ ҡәрҙәштәренә сәләм биреп сыңғыратып кешнәп тә алғыланы.

Ғилмишәриф иһә төндәр буйы Әүхәҙие менән һаташып сыҡты. Йә атына атланып, баш ҡоҫа башлаған арыш баҫыуына ыңғайлаған өйөрҙәрен ҡайырҙы, йә ҡулына тотҡан ҡылысын ҡояшта ялтлатып һелтәй-һелтәй айбарланып дошман өҫтөнә ябырылды. Башына ниндәй генә төш инмәһен, һәр ҡасан үҙен Әүхәҙи өҫтөндә күрҙе, унан башҡа күҙ алдына килтерә алманы. Өндә иһә иптәштәре эргәһенә, фронтҡа ашҡынды.

Таяҡтарын ташлап, үҙ аяҡтарына баҫҡас, уны комиссиянан үткәрҙеләр. Төрлөсә тикшереп ҡарағандан һуң, комиссия: "Рядовой Яуымбаев Ғилмишәриф һауыға башлаусылар батальонына оҙатылырға тейеш", - тигән һы ғымтаға килде. Ғилмишәриф улар ҡушҡан бөтә нәмәне лә эшләп күрһәтте, тик яралы аяғын кәрәгенсә бөгөп сүкәйеп ултыра ғына алманы. Бөгөлмәгән ағас кеүек төҙ аяғын алға этәреп уң аяғында сүкәйҙе. Госпиталь начальнигы ҡушылған күнекмәләрҙе тырышып башҡарған Ғилмишәрифтең арҡаһынан һөйөп:

- Бик сыҙамлы, беше кавалерист булып сыҡтың! Молодец! - тип комиссияның башҡа ағзаларына ҡарап алды. Улары ла госпиталь начальнигының һүҙен ҡеүәтләгәс, военврач: - Бер нисә көндән документтарығыҙҙы алырһығыҙ ҙа, в батальон выздоравливающих в добрый час! - тип һүҙен тамамланы.

- Һин нимә, иптәш Яуымбаев, бик күңелһеҙ? Әллә үҙеңдең һауығыуыңа риза түгелһеңме?

- Иптәш военврач, мин яңынан үҙ часыма, кавалерия полкына эләгергә теләйем.

- Шулаймы? - тине военврач көлөмһөрәп. - Барығыҙҙы ла үҙегеҙ теләгән часҡа ебәреп ятырға бында генеральный штаб түгел. Кемде ҡайҙа ебәрергә ҡушылған - шунда ғына оҙатам! Һеҙ бөтә Рәсәй буйлап үҙ часығыҙҙы эҙләп йөрөй башлаһағыҙ, ни килеп сығыр? Һеҙҙе тиҙерәк фронтҡа оҙатырға кәрәк. Асылда бөтә частар ҙа бер үк. Шул уҡ совет кешеләре, шул уҡ һуғышсылар! - тип һүҙ бөткәнгә хисаплап китә лә башланы.

Ғилмишәриф шул уҡ төндә таныш сестра аша алдырған кейемен ашыҡ-бошоҡ кейҙе лә ике простыняны ялғап икенсе этаждан баҡсаға һикерҙе. Апрель айының таңына һоҡланып баҡсала бер аҙ хәл йыйғас, рәшәткә аша төшөп, көнбайышҡа ҡарап юл тотто. Ул фронтҡа ҡасты. Бындай хәлдәр бик йыш булмаһа ла, осраштырып торғас, икенсе көнөнә тауыш ҡуптарыусы артыҡ күренмәне. Тик госпиталь начальнигы ғына, яуап биреүҙән ҡурҡып, үҙ госпитале буйынса приказ сығарып элде: "Рядового Яуымбаева Гилмишарифа, долженствующего быть отправленным в батальон выздоравливающих, с 3 апреля 1943 года полагать дезертирующим из эвакогоспиталя нр. 1447 и снять из всех видов довольствия". Госпиталь буйынса Смерш вәкилен саҡырып, ҡулына үҙ приказының күсермәһен тотторҙо. "Рядовой Яуымбаев Гилмишариф дезертировал из эвакогоспиталя" тигән яҙыу илдең төрлө мөйөштәрендә урынлашҡан бөтә ғәскәрҙәр штабын урап сыҡты, ләкин кавалерист һыуға батҡан шикелле юғалды, табылманы.

**(Дауамы. Башы 29-38-се һандарҙа).**

✓ *Организмды шлак һәм токсиндарҙан таҙартырға кәрәк, тип, төрлө препараттар рекламалаһалар ҙа, белгестәр бының өсөн бер ниндәй ҙә медицина һәм биологик сәбәп юҡ, тип иҫәпләй.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАНАУ ҮҪӘМЕ?

■ 2023 йылда популяр булған диеталар исемлеге асыҡланған. Бөгөн планета халҡының 45 проценты тән ауырлығын кәметергә тырыша. Улар араһында физик әүҙемлекте арттырып ябығырға тырышыусылар ҙа бар, әлбиттә, тик шулай ҙа күпселек туклаңыуҙы үҙгәртеү был йәһәттән иң дөрөҫ юсул тип уйлай. Шуға ла модалы диеталар барлыҡҡа килә лә инде. Тәүге урында тағы ла емешләк, йәшелсә, ҡуҙаҡлылар, сәтләүектәр, зәйтүн майы, шулай уҡ балыҡ һәм иттән торған диета. Табиптар әйтеүенсә, тап ошо диета ябығыусылар өсөн иң ҡулайлыһы. DASH-диета башлыса юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға, әммә унан артыҡ тән ауырлығын ташлау мөмкинлеге шик аҫтында. Ит аҡһымын ҡуҙаҡлылар, һөт, йомортҡа менән алыштырған флекситарианство ла модала бөгөн. Унда иттән тулыһынса баш тартмайҙар, тик ҡайһы бер көндәрҙә ит ризығын ҡулланмайҙар. Май һәм шәкәр булмаған аҙыҡты ғына ашайһығыҙ икән, тимәк, һеҙ волюметрик диетала. Унда башҡа ризыҡты күп итеп ашарға була, бары тик майлы һәм шәкәрле генә булмаһын. Белгестәр раҫлауынса, был диеталарҙың һәр берһенең үҙенең хәүефе бар. Шуға ла улар менән артыҡ мауыҡмаҫҡа кәңәш ителә.

■ Организм өсөн шәкәр бөтөнләй кәрәкһеҙ нәмә, тигән ҡараш дөрөҫмө, юҡмы? Ысынында иһә, глюкоза мускулдар, баш мейеһе һәм йөрәк эшмәкәрлеге өсөн кәрәкле "яғыулыҡ". Тап ошо органдар глюкоза етешмәүҙән зыян күрә. Шуға ла ҡапыл ғына шәкәрҙән бөтөнләй баш тартһағыҙ, баш насарыраҡ эшләйсәк, тиҙ арыясаҡһығыҙ. Табиптар билдәләүенсә, тештәрҙе шәкәрҙән һаҡлау өсөн, ашағандан һуң уларҙы таҙартыу ҙа етә. Ә бына йәбешкәк кәнфиттәр, кипкән емеш-еләк тештәргә күберәк зыян килтерә, уларҙа бактериялар тиҙ үрсей, һөҙөмтәлә, тештәр боҙола. Шулай ҙа шәкәрле эсемлектәрҙән баш тартыу хәйерле. Көндәлек норманы сәй менән түгел, берәй ризыҡ составында ашау ҡулайлыраҡ.

■ Танау ғүмер буйына үҫә, тигәнде ишеткәнегеҙ бармы? Пластик хирург Руслан Стражников әйтеүенсә, танау, ысынлап та, олоғайған һайын ҙурая барған кеүек тойола. Әммә был танауҙың "үҫеүе" менән түгел, ә уның тирәһендәге туҡымаларҙың үҙгәреүе менән бәйле. Мәҫәлән, тире аҫтында май ҡатламы йоҡара, сикәләр, эйәк, маңлайҙы ла ошондай яҙмыш көтә. Һөҙөмтәлә, ошо бит "ябыға", ә был фонда танау ҙур булып күренә башлай. Бынан тыш, олоғайған һайын танау кимерсәгенең формаһы һәм структураһы үҙгәрә. Кимерсәкле туҡыма һығылмалылығын юғалта. Был танауҙың формаһын үҙгәртә ала. Шулай уҡ ҡартая килә тиренең коллаген һәм эластин туҡымаһы кәмей, тире танауҙы элеккеләй тотоп тора алмай башлай.

■ Һуңғы арала детокс-программалар тәҡдим итеүселәр тағы ла әүҙемләшеп китте. Организмды шлак һәм токсиндарҙан таҙартырға кәрәк, тип, төрлө препараттар рекламалаһалар ҙа, белгестәр бының өсөн бер ниндәй ҙә медицина һәм биологик сәбәп юҡ, тип иҫәпләй. Әгәр ҙә бауыр менән бөйөрҙәрегеҙ эшләй һәм насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торһағыҙ икән, бер ниндәй ҙә таҙарыныу кәрәк түгел, ти улар. Икенсенән, "шлак" тигән нәмәнең булыуы әлегә тиклем дәлилләнмәгән, детокстан һуң уларҙың юҡҡа сағыуын күрһәткән фәнни документтар ҙа юҡ. Организмдың эшмәкәрлегенә ҡыҫылғансы, дөрөҫ туҡланырға, күберәк һыу эсергә кәрәк, тигән кәңәш бирә табиптар.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# БӘЛӘКӘЙҘӘН ҘУР БУЛА



## Бер шахмат таҡтаһына нисә бөртөк бойҙай һыя?

Барыбыҙ ҙа белеүенсә, шахмат уйыны бөтә донъяға таралған. Кәрт-фәләндән айырмалы, ул отошло уйындарҙан һаналмай, динебеҙ ҡанундары күҙлегенән сығып ҡарағанда ла - хәләл, ныҡ ҡына зиһенде эшләтеүҙе талап иткән ифрат мауыҡтырғыс шөғөл. Шахматты уйлап сығарыусы кеше хаҡында бик ирмәк, шул уҡ ваҡытта, математик яҡтан ҡарағанда, етди генә бер риүәйәт бар. Был уйынды беҙҙең эраға тиклем йәшәгән Һиндостан математигы уйлап сығарған, имеш. Яңы уйын хаҡында батша ла хәбәрҙар булған, ә үҙе уйнап ҡарағас, хатта уға ныҡ ҡына оҡшап та ҡалған ул. Шулай, был дәүләттең башлығы, әлеге кешене саҡыртып алып, уны яҡшы ғына бүләкләргә булған. Тегә кеше килеп иҫәнләшкәс, батша уға:

- Уйлап сығарған шул нәмәң өсөн күпме теләйһең, шунса байлыҡ бирә алам, тартынмай һора - ти икән батша. Ә теге кеше:

- Хөрмәтле раджа әфәнде, миңә күпмелер бойҙай бирһән, шул етер - тигән.

- Әйҙә, йәнең теләгәнсе ал, мин - бай!

Был аҡыллы кеше бер аҙ ғына уйлап алғас, батша алдында ятҡан аҡлы-ҡаралы шахмат таҡтаһына күрһәтеп:

- Миңә бына ошо таҡтаның бер шаҡмағына бер бөртөк, икенсе шаҡмаҡҡа - ике бөртөк, өсөнсөһөнә - дүрт, килеһе шаҡмағына - һигеҙ бөртөк бойҙай һанап һалығыҙ. Артабан да шулай, һәр бер шаҡмаҡҡа бойҙай һанын ике мәртәбәгә арттырып һала барып, ошо таҡтаның бөтә шаҡмағын тултырһағыҙ, ана шул миңә етер, - тип әйткән.

Был математиктың саманан тыш ябайлығына батша ныҡ аптыраған:

- Нишләп улай ғына? Мин бит һин һораған әллә күпме мәртәбәләргә күберәк бирә алам!..

- Шунан артығы кәрәкмәй, - тигән теге кеше.

Ғәйәт тыйнаҡ, әҙәпле был әҙәмгә батша ғәжәпләнеп бөтә алмаған, шулай ҙа хеҙмәтселәренә:

- Ул һораған бойҙай бөртөктәрен һанап, янсығына һалып бирегеҙ, - тип бойорған. Хеҙмәтселәре батшалыҡтың бойҙай һаҡланған келәтенә инеп киткән. Батша уларҙың ҡасан сығырын көтә башлаған. Бер сәғәт, ике, өс, ярты көн үтеп киткән. Кискә ҡарай ғына хеҙмәтселәр батша янына ингән.

- Нишләп шулай оҙаҡ быҙмырҙайһығыҙ?.. - тип батша уларҙы әрләргә тотонған.

- Хөрмәтле раджа ғәли йәнәптәре, - тип башлаған хеҙмәтсе, - был кеше һораған ҡәҙәр бойҙай һеҙҙең келәттә юҡ!..

- Нисек инде юҡ? - тип ныҡ ҡына ҡыҙа башлаған батша. Хеҙмәтсе артабан дауам иткән:

- Һеҙҙең келәттә генә лә түгел, ә бөтә батшалыҡта ла юҡ!..

Хеҙмәтсеһенә асыуланып, сығырынан сыҡҡан батша уға ҡаты яза менән янай икән, әммә тегеһе артабан да үҙенекен һөйләй:

- Бөтә донъяла ла... Ер йөҙөндәге барлыҡ урмандарҙы киҫеп, океан, диңгеҙҙәрҙе киптереп, сәсеүлеккә әйләндергән хәлдә лә, шунса игенде үҫтереп алыу мөмкин түгел...

Хикәйәттең бына ошо урынына еткән һәммә кеше, ғәҙәттә, нәҡ батша уйлаған һымағыраҡ фекер йөрөтөүсән. Әммә, ышанаһығыҙмы-юҡмы, ысынлап та, хәҙерге математиктар иҫәпләүенә лә ярашлы, әлеге шахмат таҡтаһына бер бөртөктән башлап һалынған бойҙайҙың һаны аҙаҡҡа ҡарай ғәйәт ҙур суммаға барып етә икән! Сағыштырыу өсөн: шунса бойҙайҙы йөк вагондарына тейәп, бер-береһенә теҙеп таҡҡан хәлдә, быныдай составтың оҙонлоғо Ер шарын бер нисә мәртәбә уратып ҡуйырлыҡ булыр ине...

Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, бына ошо хаҡта уҡығас, барығыҙ ҙа мәктәптә үткән "геометрик прогрессия" хаҡында һүҙ барғанына төшөндөгөҙ. Ә хәҙер икенсе бер миҫалды килтерәк, ошо төшөнсәнең ни икәнлеге хаҡында төшөнөү ауыр булмаҫ.

## Кем отолор?

Һеҙҙең ҡарамаҡҡа әлегегә оҡшашыраҡ темаға ябай ғына, ғәйәт ҡыҙыҡлы мәсьәлә бирмәк булам. Ҡулығыҙға калькулятор алып, шуны сисеп ҡарағыҙ. Һеҙҙең өсөн был бер нисә минутлыҡ ҡына эш.

Бер егет бизнесменға ниндәйҙер эшкә ялланған имеш.

- Миндә айына күпме аҡса эшләп алырға йыйынаһың? - тип һорай унан эшҡыуар хужа.

- Миңә күп кәрәкмәй, әммә, әгәр риза булһағыҙ, минең өс шартым бар.

- Йә, әйт шарттарыңды, тыңлап ҡарайыҡ.

- Беренсе шартым: көнлөк эш хаҡын көн дә түләп барыу хаҡында килешеү төҙөргә тәҡдим итәм.

- Ярай.

- Икенсе шартым: бер ай тулмай тороп, мине эштән бушатмайһың...

- Быныһы ла барырлыҡ... Ә көнөнә күпме түләүемде теләр инең?

Эшсе үҙенең өсөнсө шартын ҡуйған:

- Тәүге көн өсөн миңә 1 тин етә (һум түгел). Икенсе көн - 2 тин, өсөнсө көн - 4 тин, дүртенсе көн - 8 тин, бишенсе көн - 16 тин... Артабан да, көн һайын, алдағы көндәгенән ике мәртәбәгә артығыраҡ итеп, 30 көн тулғансы миңә түләп торһаң, мин ҡәнәғәт булыр инем...

Бизнесмен тиҙ генә уйлап алған да, был егеттең саманан тыш аҙ эш хаҡы һорауына ныҡ аптыраған (эстән генә шатланған да), ҡуш ҡуллап, уны эшкә алырға булған. Шунда уҡ килешеү ҙә төҙөгән, имеш... Тик, бер ай тулыр-тулмаҫтан, әлеге эш биреүсе бай... үкенесенән терһәген тешләрҙәй булған...

Хеҙмәт килешеүе төҙөшкән был ике кешенең кемеһе отолғанлығы хаҡында оҙаҡ икеләнмәҫ өсөн, шулай ҙа егеттең бер айлыҡ (утыҙ көнлөк) эш хаҡын иҫәпләп ҡарайыҡ әле, күпме йыйылыр икән?

Эшсегә түләнгән аҡсаны көн һайын һанап барһаҡ, бына ни килеп сыға: 25-се көндән алып, уның көндәлек эш хаҡы йөҙәр мендән ашып, 28-се - 30-сы көндәрҙә ул миллион һумлап була башлаясаҡ! Бер ҡарауҙа уҡ күренеп торһон өсөн, бына ошо ябай ғына мәсьәләнең сығарылышын тулыһынса яҙып уҡ ҡуйырға булдым.

*1-се көн - 1 тин*
*2-се көн - 2 тин*
*3-сө көн - 4 тин*
*4-се көн - 8 тин*
*5-се көн - 16 тин*
*6-сы көн - 32 тин*
*7-се көн - 64 тин*
*8-се көн - 1 һум 28 тин*
*9-сы көн - 2 һум 56 тин*
*10-сы көн - 5 һум 12 тин*
*11-се көн - 10 һум 24 тин*
*12-се көн - 20 һум 48 тин*
*13-сө көн - 40 һум 96 тин*
*14-се көн - 81 һум 92 тин*
*15-се көн - 163 һум 84 тин*
*16-сы көн - 327 һум 68 тин*
*17-се көн - 655 һум 36 тин*
*18-се көн - 1 310 һум 72 тин*
*19-сы көн - 2 621 һум 44 тин*
*20-се көн - 5 242 һум 88 тин*
*21-се көн - 10 485 һум 76 тин*
*22-се көн - 20 971 һум 52 тин*
*23-сө көн - 41 943 һум 04 тин*
*24-се көн - 83 886 һум 08 тин*
*25-се көн - 167 772 һум 16 тин*
*26-сы көн - 335 544 һум 32 тин*
*27-се көн - 671 088 һум 64 тин*
*28-се көн - 1 миллион 342 177 һум 28 тин!*
*29-сы көн - 2 миллион 684 354 һум 56 тин!*
*30-сы көн - 5 миллион 368 709 һум 12 тин!*

Ә бер айлыҡ тулайым эш хаҡы - 9 миллион һумдан да ашып китәсәк бит!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҮРМӘКСЕ...

## үҙ тиреһенә үҙе һыймай!



**Йәнәш баҫҡан ике үрмәксегә ҡарап, бер килке аптырап торҙом. Тәү ҡарамаҡҡа, икеһе лә бер үк һымаҡ. Әммә айырма бар. Берәүһенең төҫө ҡап-ҡара. Ә икенсеһенеке күпкә тоноғораҡ. Етмәһә, кәүҙәһе лә бер аҙ ҡайтыш һымаҡ. Аяҡтары ла ҡыйыш-мыйыш, тигәндәй. Әллә зәғиф инде...**



Шул мәл "ҡараҡай" көс-хәл менән бер нисә аҙым ситкә атланы ла бер аҙға тынып ҡалды. Миндә шундай тойғо тыуа, әйтерһең дә, ул ял итә. Бер килке тын алып торғандан һуң, йәйләп ҡына ҡуҙғала биреп ҡуйҙы. Бер аҙ шыуыша биргәс, уның аҙымдары күпкә нығый төштө. Ҡара әле, әллә йүгерергә маташа инде? Шул арала "ҡараҡай" апаруҡ юрғалай бирә барып, бүрәнә ярығына инеп тә юғалды. Ә теге зәғифе нимә эшләй икән? Хәҙер ҡарашымды уға йүнәлтәм. Ә уныһы тик ята. Хатта ҡымшанмай ҙа. Һайт, бар ҡас, тип ҡулды һелтәй бирҙем дә... эштең айышына төшөнөп, көләмһерәп ҡуйҙым. Бына бит, насип иткәс, үрмәксенең үҙ тиреһен алыштырған мәлен дә күрергә тура килде!

Эйе, тап шулай. Үҫә барған һайын үрмәксе үҙ тиреһен алыштыра бара. Аллаһы Тәғәлә нишләптер уны шулай яратҡан: тән үҫә, ә тире үҫмәй. Ә үҫешкән тәнгә яңы "размерлы" тире үҫешә. Һәм үрмәксе иҫке "тунды" ташлап китә. Уйлап ҡараһаң, иҫ китмәле инде. Үрмәксе, нисектер, арҡаһы яғынан һығылып килеп сыҡҡан. Тәүҙә нисектер кәүҙәһен, ә аҙаҡ аяҡтарын тартып алған. Ә аяҡтары уның дүрт пар. Йәғни, үрмәкселә һигеҙ аяҡ. Ә муйын юҡ. Баш менән арҡа бергә тоташҡан. Нәҙек кенә биле бар. Бына хәҙер үрмәксенең йүгерә алмай маташыуы аңлашыла. Беренсенән, иҫке "кейемдән" сығыу өсөн үрмәксегә барлыҡ көсөн һалырға тура килә. Арманһыҙ булып килеп сыға ул. Икенсенән, яңы тирегә бер аҙ ҡатып, бер аҙ нығынып алыу кәрәк. Шуға ҡапылғара атлай алмай әтләнгән икән "ҡараҡай". Ғалимдар билдәләүенсә, беҙҙең республикала йәшәгән үрмәксе өс йылға хәтлем йәшәй. Һәм ул ошо ғүмер эсендә ун тапҡырға хәтлем үҙ тиреһен алыштыра. Әйткәндәй, үрмәксенең тире алыштырыуы тураһында халыҡ элек-электән белгән. Бушҡа ғына беҙ асыуынан ни эшләргә белмәй йөрөгән кешегә "Нишләп тиреңә һыймай йөрөйһөң?" тип әйтмәйбеҙ бит.

Үрмәксе беҙгә таныш - ул ау үрә. Ул бар ерҙә лә киң таралған. Урман-яланда ла, ауылдағы өй-ҡурала ла күп улар. Ғалимдар әйтеүенсә, беҙҙең республикала үрмәксенең 458 төрө йәшәй. Шуныһы ҡыҙыҡ, һәр бер төр үрмәксе үҙенсә ау үрә. Һәр ау үҙ ҙурлығы, үҙ биҙәлеше, үҙ матурлығы менән айырылып тора. Әйткәндәй, күптәр үрмәксенән ҡурҡа. Әммә улар кеше өсөн ҡурҡыныс тыуҙырмай. Үрмәксе ауға эләккән себен-серәкәйҙе ашап көн күрә. Бына әле мин уның тимер күперҙә үргән ауына ҡарап торам. Әле ау ептәренә ысыҡ төшкән. Шуға улар матур һәм асыҡ күренә. Тиҙҙән ҡояш сығыр. Уның нурҙары ысыҡ тамсыларын киптерер. Һәм ошо мәлдән башлап үрмәксе ауы ҡарар күҙгә күренмәҫ ауға әйләнер. Шуныһы аптырамалы. Бына ошо үрмәксе ауы елгә әҙәлмәй. Сөнки ау үрер алдынан үрмәксе тикшереү эштәре үткәрә. Был "ғалим" тәү сиратта аяҡ остарында урынлашҡан ҡылдар ярҙамында елдең йүнәлешен һәм көсөн билдәләй. Аҙна самаһы билдәләп ултыра микән, әллә бер аймы, тигәндәй, бына быныһын әйтә алмайым. Әммә ул елдең көсөн дөрөҫ билдәләй. Һәм ау ептәрен елдең көсөнә ҡарап тарта башлай. Шуға ау артыҡ һәлнеп тә тормай. Шул уҡ ваҡытта ептәр артыҡ ныҡ та тартылмай. Ярай әле бында тимер бағанаға ау үргән, тип уйлап ҡуям мин. Ә урманда хәл икенсе. Унда ағас ботаҡтары елгә һәр ваҡыт бәүелеп тора. Аптырамалы инде, үрмәксе ау үргәндә ошо хәлде лә билдәләргә һәләтле.

Әшулай ҙа тимер бағанаға ау үреү күпкә анһатыраҡ. Тәүҙә үрмәксе ау ебен бағанаға нығыта һәм уны һуҙа-һуҙа икенсе бағана яғына сыға. Шунан ау ебен кире йыя башлай. Һәм самалап тартып, тәүге "бауҙы" йәбештереп ҡуя. Шунан йәйлап башҡаларын нығыта башлай. Күреп тораһығыҙ, ауҙы нисек етте шулай үрмәй, ә уны бик матур итеп үреп ҡуя. Урманда ау үреү күпкә ҡатмарлыраҡ. Бында тәүге бауҙы нығытыр өсөн уға тәүге ағастан төшөргә, ер буйлап барырға һәм икенсе ағастың олонона үрмәләргә кәрәк була.

Үрмәксе бик һәйбәт күрә. Сөнки уның күҙҙәре күп. Төп күҙҙәр булып пар күҙ иҫәпләнә. Был ҙур күҙҙәр йөрөй һәм тирә-яҡты һәр ваҡыт күҙәтеп тора. Шуға өҫтәп, тағы алты бәләкәй күҙ бар. Улары йөрөмәй. Һәр бәләкәй күҙ үҙенә тәғәйен йүнәлеш өсөн генә яуаплы. Үрмәксенең тағы бер үҙенсәлеге бар - ул һәйбәт ҡышлай. Ныҡ һыуыҡтарҙа уның тәне һыуыҡҡа бирешмәгән матдә бүлеп сығара. Беҙҙенсә әйткәндә, тосол (йә антифриз) була инде.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына ул үрмәксе. Ә ниндәй мөғжизәләргә эйә! Һүҙемде тамамлап шуны әйткем килә. Әйҙә, йәшәгән үрмәксе йәшәһен үҙ тиреһенә һыйыша алмай. Ә беҙгә һәр ваҡыт тыныс тормошта тирегә һыйып ҡына йәшәргә насип булһын.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ГРИПП "ҠОТ ОСОРҒОС"МО?



**"Быйыл грипп эпидемияһы дүрт яңы штаммы менән һөжүм итәсәк, хатта ки был осор ковид "ял итәсәк" , тип ҡотто осоралар. Был мәлгә нисек әҙерләнергә, уның ниндәй эҙемтәләргә килтереү хәүефе бар?"**

Мәскәүҙәге Н.И.Пирогов исемендәге Рәсәй милли-тикшеренеү медицина университетының йоғошло сирҙәр һәм эпидемиология кафедраһы мөдире, профессор Владимир НИКИФОРОВ яуап бирә: Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) экспертары фараздарынса (ә улар был хаҡта йыл башынан уҡ шаулаша башланы), быйылғы йыл ахыры менән 2024 йыл баштарында грипп үҙенең бер юлы дүрт штаммы менән киләсәк,тиген имеш-мимеш таралды. Бер аҙ аныҡлыҡ индереү кәрәктер: көтөлгән, ләкин саҡырылмаған был "ҡунаҡ"тарҙың тәүгеһе - 2009 йылға A (H1N1) штаммының яңы төрө, A (H3N2) гонконг штаммы һәм B Victoria менән Yamagata төрҙәре. ВОЗ фекеренә ҡарағанда, былар, ысынлап та, ауыр кисерелеүсе һәм оҙайлы аяҡҡа баҫыуҙы күҙаллауы аяуһыҙ сир. Был яңы штаммдар менән әле сирләп ҡараған кеше булмаһа ла, уның шундай билдәләре атала: көслө температура, танау тоноу, тамаҡ ауыртыу, хәлһеҙлек, организмдың ағыуланыуы. Уйлап ҡараһаң, былар бөтәһе лә грипп сире өсөн өйрәнелгән ҡәҙимге билдәләр. Һис әйтеп булмай: ВОЗ экспертары бындай ҡәтғилекте ҡайҙан алғандыр... Билдәле булыуынса, грипп вирусы даими үҙгәреп тора һәм йыл һайын яңы штамм килеп сыға - бында аптырарлыҡ бер ни ҙә күпмәйем. Йәки, мәҫәлән, бынауы "Ямагата" төрө беҙҙә, ғөмүмән, юҡ, беҙ уны күптән күргәнебеҙ юҡ инде - яҡын арала ул ҡайҙан килеп сығыр икән?..

Дөрөҫөн генә әйткәндә, шәхсән мин үҙем ВОЗ-дың "кот осорғос" был фаразына әллә ни ышанмайым да. Шундай-бындай хәбәрҙәр менән халыҡты ҡурҡытыуҙың да бер нигеҙен дә күрмәйем. Һәр хәлдә, беҙ был өлкәлә һәр ваҡыт хәбәрҙар булырға тырышабыҙ һәм хәл-әхүәлдәрҙе күҙәтеп барабыҙ: яҡын арала әлегеләй "кот осорғос" штаммдарҙың һөжүме беленмәй, ләкин һиҙгерлекте юғалтырға ярамай, вакциналар әҙерләнә. Шулай ҙа барыбер яҡын араларҙа яңы пандемия килеренә шикләнәм, сөнки пандемия өр-яңы штамм пәйҙә булған осраҡта башлана: уға ҡаршы кешеләрҙә иммунитет та булмай әле. Йәғни иммун системаһы өсөн грипп вирусының яңы, кешелеккә бөтөнләй таныш булмаған штаммы тамырынан үҙгәреш кисергән антиген тәҙәлешлә булырға тейеш. Ә вируста глобаль үҙгәрештәр һирәк була. Беҙҙә бит эпидемия күптән түгел генә булып үтте, яңыһына иртәрәктер әле, тиген фекерҙәмен. Ә шулай ҙа икенсе бер йәһәттән ҡурҡыныс һағалай кешелекте һәм ул ҡош киҙеүе менән бәйле. Дөрөҫ, ул әле кешенән кешегә түгел, ә кешегә ҡоштарҙан йоға. Ҡасан да булһа, ҡош киҙеүе вирусы төрҙәш-ара ҡаршылыҡты үтеп, мутацияға дусар ителһә, кешенән кешегә йоғоу хәүефе барлыҡҡа килеүе лә бар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Уңыш дошмандарының барлыҡҡа килеүе

**Уңышығыҙҙың иң төп дошмандарының береһе - үҙегеҙ.** Эйе, тап шулай. Һеҙ һәм һеҙҙең инаныуҙарығыҙ. Әммә был яҙмалар һеҙҙе үҙ уйҙарығыҙға хужа булырға өйрәтер.

**Икенсе дошман: хәләлегеҙ.** Ирегеҙ йәки ҡатыныгыҙ, донъялағы иң яҡын кеше һеҙҙең тормошоғоҙға ҙур йоғонто яһай. Бәлки, бер аҙ шаңҡытырмын, әммә мөһим мәсьәләләрҙе икенсе яртығыҙ бөтөнләй булмағандай ҡабул итергә кәрәк. Был дошманды еңеү һәм пуля үтмәҫлек менталлеккә эйә булыу өсөн кәрәк!

Партнерығыҙ (партнер - латин һүҙе, өлөш, ҡатнашыу тигәнде аңлата) тормошоғоҙға тулыһынса түгел, бары тик өлөшләтә генә инә ала. Партнерҙарҙың үҙ ихтыяжы һәм уларҙың бурыстарын иғтибарлап ҡарап, һеҙ ни өсөн күп никахтарҙың тарҡалыуына һәм күптәрҙең килеменең бер өлөшөн элекке партнерҙарына алимент итеп түләүенә аптырамаҫһығыҙ. Әммә тормош иптәшегеҙ һеҙҙе ысынлап та яратһа, ул һеҙгә үҙегеҙ булып ҡалырға һәм яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнергә рөхсәт итер. Шул саҡта инде тормош төрлө төҫтәрҙә балҡыр, аҡса һыу булып ағыр, һеҙ ғаилә тормошоноң барлыҡ сағыулығын күрә алырһығыҙ. Барыһы ла ябай ғына! Әгәр бәхетле мөнәсәбәт ҡорорға теләһегеҙ, эҙмә-эҙлекле компромистар сәйәсәте ярҙам итмәҫ: улар бары тик ғаиләлә ике бәхетһеҙ кеше, ике үҙен тапмаған шәхес барлыҡҡа килеүенә генә килтерә.

**Өсөнсө дошман: ғаиләгеҙ.** Ҡәйнағағыҙҙың мыҫҡыллауы, ҡәйнәгеҙҙең көнләшеүе, олатайығыҙҙың мыжыуы - барыһы ла ян-яҡтан йоғонто яһай, һәр туғаныгыҙ тормошоғоҙ һәм һайлауығыҙ тураһында әйтерҙәй һүҙ табыр. Был осраҡта өндәшмәүең яҡшыраҡ - пуля үтмәҫлек менталлек тураһында онотмағыҙ.

**Уңышығыҙҙың дүртенсе дошманы: коллегаларығыҙ.** Уйлап ҡарағыҙ әле, улар һеҙҙең уңышҡа өлгәшеүегеҙҙе һәм башҡаларҙан айырылып тороуығыҙҙы теләйме? Һеҙҙең һәр уңышығыҙ уларҙа бары тик уфтаныу ғына тыуҙыра. Үҙҙәре уңышҡа табан бер аҙым яһарға тәүәккәлләмәгәс, улар еңел юл һайлай һәм һеҙгә төрлөсә аяҡ сала, күңелегеҙгә шикләнеү орлоғо һалырға тырыша, үҙегеҙгә ышаныуығыҙҙы юҡҡа сығара.

**Бишенсе дошман: йәмғиәт.** Әгәр гәзит уҡыһағыҙ, телевизор ҡараһағыҙ, һеҙҙе мазохист тип атарға мөмкин. Тормошоғоҙҙо яҡшыртыр өсөн һеҙгә үлтереш, ҡан ҡойош һ.б. кире күренештәр шаһиты булырға кәрәкме?

Үҙегеҙ, тормош иптәшегеҙ, ғаиләгеҙ, коллегаларығыҙ һәм йәмғиәт - уңышығыҙ дошмандары. Уларҙан азат була алмаһағыҙ, түбәндәге алтын ҡағиҙәгә буйһоноғоҙ: бер ваҡытта ла ғәмәлдәрегеҙ тураһында һөйләмәгеҙ һәм уй-фекерҙәрегеҙҙе менән бүлешмәгеҙ.

Хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо дошмандар менән яҡынданыраҡ танышайыҡ.

**Пьер МОРАСИ.**



## 9 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 1.05, 1.50, 2.30, 3.05, 3.15, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 23.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: Дело манекенщицы". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лихорадка". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**
**14.45, 17.45, 20.15, 4.00, 5.00, 5.45 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 23.30, 5.30 История одного села. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 20.30, 3.00, 4.15 Вечерний телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Кодаса, или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**2.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 10 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: Дело манекенщицы". [16+]
0.10, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лихорадка". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00, 16.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15, 5.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45, 4.30 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 "Дорога к храму". [6+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 История признания. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа)-"Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ.**
**22.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**0.30 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**3.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**3.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Моя планета - Башкортостан. [6+]**

## 11 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: Дело манекенщицы". [16+]
0.10, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лихорадка". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-6". [16+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро. [12+]**
**7.30, 2.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 6.00 Бай. [12+]**
**8.15 Ҡурай даны. [12+]**
**8.30 Семь чудес. Детский концерт. [6+]**
**9.00, 19.00, 20.30 "Наш дом - Башкортостан". [12+]**
**11.00 Торжественное собрание, посвященное Дню Республики. [12+]**
**12.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**13.00 "Наш дом - Башкортостан". [6+]**
**14.00 Ете егет. [12+]**
**14.45 Автограф. [12+]**
**15.15 Концерт Нефтекамской Государственной филармонии "В братстве народов - сила России!" [12+]**
**16.45, 5.15 Орнамент. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Преображение. [12+]**
**18.15 Остаз. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15, 5.45 Интервью. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Д/с "Герои". [12+]**
**23.45 Концерт Залии Ганиатуллиной "Дочь степей". [12+]**
**0.45 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**3.15, 4.15 Вечерний телецентр. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 12 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: Дело манекенщицы". [16+]
0.10, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Лихорадка". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-6". [16+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 Остаз. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 20.15, 3.45, 5.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**17.00 Преображение. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 2.45, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**2.15 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Орнамент. [12+]**
**6.00 Дорога к храму. [6+]**

## 13 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Голос. Уже не дети". [12+]
23.50 "Матадор". "Haute couture". К 60-летию со дня рождения Валентина Юдашкина. [16+]
1.05, 1.45, 2.25, 3.00, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Истории Большой Страны. [12+]
0.55 Х/ф "Надломленные души". [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30, 5.15 Тормош. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15 Территория женского счастья. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз)**
**13.45, 17.45, 5.45 Интервью. [12+]**
**14.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область КХЛ.**
**22.00, 3.00 Д/ф "Своих не бросаем". [12+]**
**23.00, 3.30 Ете егет. [12+]**
**23.45 Концерт Алии Искужиной и Зайнетдина. [12+]**
**0.45 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**2.15 Новости (на баш. яз). [12+]**
**4.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Спортивная история. [12+]**

## 14 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Д/ф "Я оптимист, но не настолько..." К 90-летию со дня рождения Марка Захарова. [12+]
14.00, 15.15 Х/ф "Формула любви". [0+]
16.00 Д/ф Премьера. "Маэстро русской моды". К 60-летию со дня рождения Валентина Юдашкина. [12+]
16.55 "Матадор". "Haute couture". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
19.15 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.20 Х/ф Премьера. "Великий". [18+]
1.25 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Короткая программа. Этап I. [0+]
2.40, 3.20, 4.00, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 В кругу друзей.
12.50 Доктор Мясников. [12+]
14.50 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Моей любимой". [16+]
0.35 Х/ф "Моя чужая жизнь". [12+]
3.50 Х/ф "Мечтать не вредно". [12+]
5.30 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 Остаз. [12+]**
**8.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**8.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 Д/ф "Своих не бросаем". [12+]**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Созвездие талантов". [6+]**
**11.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.15 Алтын тирмә. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**19.00, 20.15, 5.45 Интервью. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**1.00 Спектакль "Операция". [12+]**
**3.05 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 15 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 15.20, 0.10, 2.30, 3.10, 3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.45 Николай Караченцов и Елена Шанина в легендарном спектакле Марка Захарова "Юнона" и "Авось". [16+]
15.55 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Короткая программа. Этап I. [0+]
17.00 Д/ф Премьера. "Ни шагу назад". Специальный репортаж. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
0.55 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Произвольная программа. Этап I. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 1.30 Х/ф "Путь к сердцу мужчины". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены. [6+]
12.50 Х/ф "Девятый вал". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 9.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Ради добра. [12+]**
**9.15 Орнамент. [12+]**
**9.45 Д/ф "Своих не бросаем". [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз)[12+]**
**13.15, 3.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Минск). КХЛ.**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Творческий вечер Рифа Габитова. [12+]**
**0.00 Спектакль "Скупой". [12+]**
**1.45 Тайм-аут. [12+]**
**2.15 История одного села. [12+]**
**2.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.15 Историческая среда. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Интервью. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (24) дүшәмбе | 6:04 | 7:34 | 13:30 | 16:11 | 19:31 | 20:01 |
| 10 (25) шишәмбе | 6:06 | 7:36 | 13:30 | 16:09 | 19:28 | 19:58 |
| 11 (26) шаршамбы | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:07 | 19:26 | 19:56 |
| 12 (27) кесе йома | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 16:05 | 18:23 | 19:53 |
| 13 (28) йома | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 16:03 | 18:21 | 19:51 |
| 14 (29) шәмбе | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 16:01 | 18:19 | 19:48 |
| 15 (30) йәкшәмбе | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 15:59 | 18:16 | 19:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РЕСПУБЛИКА КӨНӨ МЕНӘН!

**11 октябрҙә Башҡортостанда Республика көнө - Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнө билдәләнә. Байрам Башҡортостан Республикаһы Юғары Советының 1992 йыл 27 февраль ҡарары менән ғәмәлгә индерелә.**

1990 йылдың 12 июнендә РСФСР халыҡ депутаттары съезы Рәсәй Совет Федератив Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итә. Был Декларация, шулай уҡ "ССР Союзы һәм Федерация субъекттары араһында вәкәләттәрҙе бүлешеү тураһында", "ССР Союзы, союздаш һәм автономиялы республикалар араһында иҡтисади мөнәсәбәттәрҙең нигеҙҙәре тураһында" СССР закондары Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларацияны эшләүҙең һәм ҡабул итеүҙең юридик нигеҙе була. 1990 йылдың июль аҙағында Декларацияның ике проекты эшләнә, улар 1990 йылдың 2 августында өйрәнеү һәм фекер ҡороу, тәҡдимдәр индереү өсөн СССР, РСФСР һәм БАССР халыҡ депутаттарына ебәрелә. 1990 йылдың 10 августында Декларацияның бер нисә тексы бөтә халыҡ фекер алышыуына сығарыу өсөн республика гәзиттәрендә баҫыла, проекттар араһында ғалим-юристар Л. Ш. Ғүмәрова, З. И. Йәнекәев, А. Н. Тимонин һәм Ф. З. Йосопов тарафынан әҙерләнгәне лә була.

Дәүләт суверенитеты тураһында декларация преамбуланан һәм 10 пункттан тора. Республика Юғары Советы, Башҡортостандың ғәмәлдә булған сиктәре эсендәге бөтә территорияһында дәүләт суверенитеты иғлан итеп, Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы (Башҡорт ССР-ы) - Башҡортостан тип үҙгәртә. Декларация ерҙе, ер аҫтын, тәбиғәт байлыҡтарын һәм ресурстарын, иҡтисади һәм фәнни-техник потенциалды Башҡортостандың күп милләтле халҡының милке тип иғлан итә; республиканың Рәсәй Федерацияһы менән мөнәсәбәттәре договор нигеҙендә ҡорола тип билдәләй; бөтә территорияла республикаға тулы дәүләт власы (федераль үҙәккә ирекле тапшырыла торған хоҡуҡи көйләү даирәләренән башҡа) бирелеүен нығыта, республиканың ҡануниәт системаһы үҫеше һәм хоҡуҡи дәүләт төҙөү принциптарын билдәләй; Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәгән башҡорт милләтле кешеләрҙең милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә булышлыҡ итеүҙе күҙҙә тота.




*Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.*

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Асҡыс. Урындыҡ. Һунар. Быйма. Өҫтәл. Вторник. Раиса. Өлкәр. Нимәрә. Лиана. Луи. Тарма. Нужа. Окоп. Башаҡ. Урҙа. Ай. Әрйә. Ҡобау. Луганск. Үҙәк. Ил.

**Вертикаль буйынса:** Аралбаев. Бураҡаева. Исхаҡова. Ужым. Йәйләү. Аванс. Ары. Лепкә. Ремарк. Нурғәлин. Уй. Рәйес. Соҡор. Күл. Өкө. Табаҡ. Лупа. Әрем. Лар. Аңҡау.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Беҙҙең "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар араһында мәктәптә эшләп йөрөгән, йә булмаһа, ғүмерен ошо хеҙмәткә арнап, хаҡлы ялға сыҡҡан изге һөнәр эйәләре - уҡытыусылар бихисап икәнен беләбеҙ. Гәзитебеҙ йөкмәткеһе лә бит башлыса тап ошо белемле, аңлы, фиҙаҡәр, илһөйәр, телһөйәр ҡатлам кешеләренә тәғәйенләнгән. Бар ниәтебеҙ һәм тырышлығыбыҙ - уҡытыусыға йәш быуынды, халҡыбыҙҙың киләсәген, Башҡортостаныбыҙ ныҡлығын һәм ҡеүәтен тәрбиәләүҙә ҡулыбыҙҙан килгәнсә ярҙам итеү, уларҙы рухлы һәм йөкмәткеле мәғлүмәт менән тәьмин итеү. Байрамығыҙ менән ҡотлайбыҙ, хөрмәтле уҡытыусылар! Уҡытыусы исемен ғорур йөрөтөрлөк уңыштар ҡаҙаныуығыҙҙы теләйбеҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 октябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+
**12 октябрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 12.00 6+
**13 октябрь "Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева), театрлаштырылған тамаша. 12+
**14 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**15 октябрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 октябрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+
**11 октябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**11 октябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 октябрь** Мәскәү волынка оркестры концерты. 6+
**14 октябрь "В ожидании чуда".** Орган йыһаны. 11.00 0+
**14 октябрь "Рухи көс".** "Арғымаҡ" төркөмө концерты. 18.00 6+
**15 октябрь "Сказка о Спящей царевне и семи богатырях"**, мюзикл. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**9 октябрь "С чего начинается Родина?"** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.00, 15.00 6+
**10 октябрь "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**14 октябрь "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 октябрь Премьера! "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 12+
**13 октябрь "Урал легендалары"** (С. Сурина), мюзикл. 6+
**14 октябрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 18.00 12+
**15 октябрь "Как зажигаются звезды"** әҙәби-музыкаль лекторий. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

✔ **Режиссерҙар күберәк проза әҫәрҙәрен сәхнәләштереүгә тотона башланы, сценарийҙар яҙыу тенденцияһы күҙәтелә. Был, бер яҡтан, милли драматургия өсөн бик ҡурҡыныс күренеш.**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЗАЛДАР ТУЛЫ БУЛҺЫН!

**Республикабыҙҙа һәр миҙгелдең үҙенә генә хас матур йолаһына әүерелгән саралары бар. Көҙ айының шундай йолаларының береһе - театр-филармонияларҙың яңы ижад миҙгеле асылыуы булыр. Ошо уңайҙан Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Илшат Йомағолов исемендәге Башҡорт драма театры художество етәксеһе Илһам РӘХИМОВ менән әңгәмәләштек.**



**Быйыл 33-сө ижад миҙгелен ҡаршылаған театр тамашасылары өсөн ниндәй яңылыҡтар әҙерләнә?**

- Сираттағы ижад миҙгелен быйыл 12 октябрҙә асабыҙ. Ҡәҙерле тамашасыларыбыҙ иғтибарына Флорид Бүләковтың "Гөлнара" повесы буйынса ҡуйылған драманы тәҡдим итәбеҙ. Спектакль "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә бойомға ашырыла. Ш. Бабич исемендәге БР дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Илсур Ҡаҙаҡбаев - сценарий авторы һәм ҡуйыусы режиссер. Драмала үткән быуаттың 30-сы йылдарында барған ваҡиғалар бәйән ителә: ауылға беренсе уҡытыусы - йәш ҡыҙ Гөлнара йүнәлтмә буйынса эшкә килә һәм быуаттар дауамында үҙ йолалары менән йәшәгән урындағы халыҡ араһында агитация эштәрен йәйелдерә. Илебеҙ тарихы, халҡыбыҙ яҙмышы сағылыш тапҡан был спектаклдә. Гөлйемеш Ибраһимова - Гөлнара ролендә, Илнур Сәлимгәрәев -уның һөйгәне Рәшит, Марат Зөбәйеров - Рәшиттең ҡустыһы Ильясты уйнай, ә күмәк сәхнәләрҙә театрҙың барлыҡ тиерлек артистары ҡатнаша.

Премьера спектакленән тыш, үткән ижад миҙгелендә бер тапҡыр ғына уйналған "Әсәй, бына һиңә килен...дәр" спектаклен ноябрь айынан дауам итәсәкбеҙ. Ғәҙәттәгесә, декабрь айында кескәй тамашасыларыбыҙҙы матур һәм мөғжизәле Яңы йыл әкиәте менән ҡыуандырмаҡсыбыҙ.

**Яңы ғына Өфөгә килеп ҡайттығыҙ, гастролдәргә йыш йөрөйһөгөҙмө?**

- Эйе, гастролдәргә йыш сығырға тырышабыҙ, сөнки ятҡан таш мүкләнә. Баш ҡалаға күренекле яҙыусы, драматург Наил Ғәйетбаевтың 75 йәшлек юбилейы уңайынан "Нисек кейәүгә сығырға?" комедияһы менән барып ҡайтҡайныҡ, әлеге көндә коллективыбыҙ Стәрлебаш районында "сәйәхәттә". Октябрҙә Учалы һәм Әбйәлил райондары, 14-15 ноябрҙә тағы ла баш ҡала тамашасылары менән осрашырға ниәт итеп торабыҙ. Өфөгә Мөнир Ҡунафиндың "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы" спектакле менән киләсәкбеҙ. Ғөмүмән, тамашасының ҡыҙыҡһыныуы һүнмәһен өсөн төрлө жанрҙарҙа ижад итергә тырышабыҙ, шулай уҡ репертуарыбыҙҙа комедия һәм мелодрамалар күпселекте тәшкил итеңкерәй. Был инде халыҡ ихтыяжына таянып эшләргә тырышыуыбыҙға ла бәйле.

**Бөгөн театрҙың художество етәксеһен борсоған мәсьәләләр ниндәй?**

- Артистарыбыҙ үҙ эшенең оҫталары, спектаклдәребеҙ бик яҡшы ҡабул ителә, тамашасыларыбыҙ килә, шөкөр. Әммә милли драматургияның үҫеш кимәле бөгөн һәр театрҙы борсоған мәсьәләләрҙең береһелер. Ҡыҙғанысҡа, пьесалар араһынан һайлап алыу мөмкинлегебеҙ бик юҡ, драматургтар аҙ. Шуға режиссерҙар күберәк проза әҫәрҙәрен сәхнәләштереүгә тотона башланы, сценарийҙар яҙыу тенденцияһы күҙәтелә. Был, бер яҡтан, милли драматургия өсөн бик ҡурҡыныс күренеш, уның киләсәге ниндәй булыр? Пьесалар яҙған йәштәр бик һирәк бит хәҙер. Күҙгә күренгәндәре менән бәйләнештә булырға, уларҙы үҫтерергә, кәңәш-төңәш итергә тырышабыҙ былай. Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡтағы филиалында уҡыған йәштәрҙе был эшкә ылыҡтырырға тырышабыҙ: "Ашҡаҙар" әҙәби түңәрәгендә шөғөлләнгәндәре менән бәйләнештәр булдырабыҙ. Күптән түгел ошо юғары уҡыу йортон тамамлаған Рәфис Ҡуйбағаровтың "Минең йөрәк һиндә тибә" тигән спектаклен сәхнәләштерҙек, уға ҡарап башҡалар ҙа өлгө алыр, эйәрерҙәр тип өмөт итәбеҙ. Тик, нишләптер, бөгөнгө йәштәргә саҡ ҡына сыҙамлыҡ етеңкерәмәй, ҡайҙалыр ашыға улар. Яҙғанын төҙәтеп, өҫтәп эшләргә теләктәре һүнә лә ҡуя. Шулай ҙа йәштәрҙе һис тә иғтибарһыҙ ҡалдырмайбыҙ, даими бәйләнештәбеҙ.

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## ВЕНГРИЯҒА БАРАСАҠТАР



**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры йылдағыса үҙенең сираттағы ижад миҙгелен матур саралар менән асып ебәрҙе.**

Театрҙың 104-се ижад миҙгеле Зәһиҙә Мусинаның "Килен" повесы буйынса Фирғәт Ғарипов ҡуйған драма менән асылды. Спектакль буйынса эш тураһында һөйләп, ҡуйыусы режиссер проза әҫәре менән тәүгә эшләүен, уны сәхнәгә яраҡлаштырыу өсөн яҙыусы Зөһрә Бураҡаеваға мөрәжәғәт итеүҙәрен әйтте. "Йәмғиәтебеҙҙә бындай теманы асыҡтан-асыҡ ҡуҙғатыу, был турала һөйләү ғәҙәте нисектер юҡ. Һәр ҡатын-ҡыҙҙың күңелендә кисерештәр уята ул. Спектаклде эшләгәндә лә быны тойҙоҡ", - тине Фирғәт Ғарипов. Әҫәрҙең авторы Зәһиҙә Мусина ла яҙғандарының әсәһе яҙмышын сағылдырыуын йәшермәй. "Килен" спектаклендә төп ролде Лилиә Ғәлина башҡара.

Театр тамашасыларын был миҙгелдә шулай уҡ Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" роман-эпопеяһы буйынса ҡуйылған спектакль дә көтә. Уны театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов сәхнәгә сығара. Спектакль ике өлөштән торор, тип күҙаллай ижади төркөм. Тәүгеһен Яңы йыл байрамына тиклем өлгөртөргә иҫәпләйҙәр. Бынан тыш, кескәй тамашасылар өсөн Евгений Шварцтың "Юғалған ваҡыт тураһында әкиәт"е әҙерләнә. "Быйыл тәүге тапҡыр спектаклдәрҙе йәйгеһен үк - 23 августа күрһәтә башланыҡ. Был бик уңышлы килеп сыҡты, тамаша залдары тулы булды. Сентябрҙә "Театр көҙө" милли театрҙар фестивалендә Саранск ҡалаһында булдыҡ. Ҡабарҙы-Балҡар республикаһының Нальчик ҡалаһына гастролдәргә сыҡтыҡ. Әйткәндәй, Эльбрусты яуланыҡ. Ә ноябрҙә Ҡаҙан ҡалаһына ҙур гастролдәр менән юлланабыҙ. Республика ауыл-ҡалалары буйлап та даими йөрөп торабыҙ һәм эш дауам итәсәк", - тине театр директоры Иршат Фәйзуллин.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Быйыл X Халыҡ-ара театраль олимпиада Венгрияның Будапешт ҡалаһында уҙа һәм унда Рәсәйҙән М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры ҡатнаша. Улар илдең 95 милли театр коллективы араһынан һайлау үткән һәм Олимпиадаға Олжас Жанайдаров пьесаһы буйынса Айрат Абушахманов ҡуйған "Джут" спектаклен алып бара. Был спектаклде Венгрияла күрһәтеүҙе ҡабул итеүсе яҡ үҙе үтенгән.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИШӘК - АУЫРЫҒАНЫН...

### ир ҡартайғанын белмәҫ

Ир өйҙөң бер сатын тотор, ҡатын өйҙөң өс сатын тотор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ауыртыныуҙар, һыҙланыуҙар кисергәндә түҙемле бул, улар һиңә бер саҡ файҙа килтерер.

**(Овидий).**

Шулай ҙа була: хәйер биреүселәр хәйер һораусыға, үлтереүселәр - үлтерелеүсегә, еңеүселәр еңелеүсегә әйләнә.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Мөхәббәт өсөн айырылып тороу - утҡа өргән ел һымаҡ: көсһеҙ утты һүндерә, көслөһөн тағы ла көсәйтә.

**(Р. Бюсси).**

Коллега: аңлашылмаған сәбәптәр буйынса һеҙҙең менән бер ерҙә эшләгән һәләтһеҙ субъект.

**(Пьер Данинос).**

Йомарт булыу - ул биреп булғандан күберәк биреү, ғорур булыу - алып булғандан әҙерәк алыу.

**(Халиль Джебран).**

Өс кешене бергә йыйығыҙ һәм улар араһында һеҙ бер тиранды, уның бер фекерҙәшен һәм... бер ҡорбанды күрерһегеҙ.

**(П. Буаст).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йылға буйында ташбаҡа менән саян осраша. Саянға йылғаның теге яҡ ярына сығырға кәрәк була, әммә йөҙә белмәгәс, ҡурҡыбыраҡ ҡала. Шуға ла ул ташбаҡаға теге ярға сығарып ҡуйырға ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Ташбаҡа саянға ышанырға ярамағанын белә, әммә тегеһе бик ныҡ инәлгәс, ҡаршы тора алмай. Бына саян ташбаҡаның арҡаһына менеп ултыра һәм улар йылғаның теге яҡ ярына йөҙөп китәләр. Саян юл буйына үҙен тыныс тота, әммә ярға яҡынлау менән үҙ роленә инә: ташбаҡаны саға.**

**- Ах, һин яуыз! - тип ҡысҡырып ебәрә ташбаҡа. - Минең тәбиғәтем шундай: мин һәр кемгә ярҙам итергә тырышам. Бына мин һиңә лә ярҙам иттем, ә һин изгелеккә яуызлыҡ менән яуап бирҙең...**

**- Тыңла әле, - ти саян. - Һинең тәбиғәтең - башҡаларға ярҙам итеү, тинең. Ә минең тәбиғәтем - ағыуымды сығарыу, сағыу. Шулай булғас, ниңә һин үҙ тәбиғәтеңде генә - изгелек, ә минекен яуызлыҡ тип атайһың? Ҡайҙа бында ғәҙеллек?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23039

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
6 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3177
Заказ - 1372